✓ *Үҙең йәшәгән заманға зарланыу, властағыларҙы тәнҡитләү, үткәндәрҙе һағынып илау, киләсәккә тормошҡа ашмаҫтай хыялдар бағлау - был беҙ түгелме?*

*(Э. Берк).*


# Киске Өфө

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

27 ИЮЛЬ - 2 АВГУСТ (МАЙАЙ - УРАҒАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№30 (552)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Ашыҡҡан - ашҡа бешкән,**

әкрен барған - ҡуянға еткән...



3

**"Forbes"тың баһаһы...**

тағы бер ҡат раҫланды



4

**Башҡорт ҡалаһы -**

Каталон атласында



7

**Бер быуатҡа торош....**



8-9 ҡанлы бер көн

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Хаҡ хөкөм Ерҙә генә түгел, Күктә лә бар бит әле. Уныһы тураһында ни уйлайһығыҙ?

***Нурмөхәмәт хәҙрәт НИҒМӘТУЛЛИН, Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе, мөфтөй:*** Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Ер йөҙөндә бөтә нәмә лә Аллаһы Тәғәлә ҡанундарына бәйле: Унын ҡөҙрәте менән Ер әйләнә, ҡояш нурҙарын тарата, үлән, гөлсәскәләр үҫә, ҡыҫҡаһы, Аллаһыбыҙ ҡөҙрәтенән башҡа хатта япраҡ та һелкенмәй. Бөтә хәрәкәт, үҫеш ана шул ҡанундар нигеҙендә боҙолмай дауам ителә. Ер шарында төрлө дәүләттәр бар, һәр дәүләттең үҙ ҡанундары. Ҡанундарҙы тотоу, уларҙы теүәл үтәү үҫеш, алға барыу һәм бәрәкәт тыуҙыра. Мөъмин мосолмандарыбыҙ Аллаһы Тәғәлә ҡанундарын теүәл үтәй икән, улар дәүләт ҡанундарын да боҙмай һаҡлаясаҡ. Ә инде ҡайҙа был тәртип боҙола, әйтәйек, юл йөрөү ҡанундарын ғына алып ҡараһаҡ та - уны үтәмәүҙең нindәй һәләкәттәргә алып килеүен күрәбеҙ. Тимәк, ҡанундарҙы үтәмәүҙең, һанламауҙың яҙаһы бар. Исламда бәндәләрҙе тәртипкә күндереү, уларҙы аҙғынлыҡтан, гонаһтарҙан ҡурсалау өсөн индерелгән тәрбиә мәҙрәсәһе бар. Шуларҙың береһе - изге Рамаҙан айында башҡарыла торған ураҙа. Рамаҙан - ул тыйылыу айы. Ураҙа тотҡан кеше көн дауамында хәләл ризыҡ менән хәләл эсемлектәрҙән тыйылып торған кеүек, насар ғәҙәттәрҙән, насар һүҙҙәрҙән, ялғандан, башҡа төрлө алама ҡылыҡтарҙан тыйылып тора һәм шуның менән ул үҙен башҡа ваҡыттарҙа ла гонаһ ҡылыуҙарҙан тыйыла белергә өйрәтә. Мосолман ҡәрҙәштәрҙең һәммәһенә лә ошо изге айҙы сабырлыҡ менән фарыз ғибәҙәттә үткәрергә насип итһен ине, тип теләйем ысын күңелдән. "Һәр кем ғәмәленә күрә әжерен алыр" тигәнде онотмайыҡ. Әҙәм балаһы ерҙә ҡылған яуыҙлыҡтары, гонаһтары өсөн ҡасан да булһа донъялыҡта, донъялыҡта булмаһа, Хисап көнөндә Аллаһ ҡаршыһында яуап тотор. Был фани донъяла ла бит ҡанун боҙоусылар тимер рәшәткә артына эләгеп тора, әммә был ундай гонаһлыларға Ахирәттә әҙерләнгән яза урыны ише генә түгел. Гонаһлы бәндәләр йәһәннәм утына инер. Бындай яҙанан ҡотолоу юлы бер генә - донъялыҡта Аллаһҡа табан юл табырға тырышлыҡ һалып, изге ғәмәлдәр ҡылыу, ғибәҙәт, намаҙҙан айырылмай йәшәү һәм көн-төн Аллаһынан үҙебеҙҙе тура юлға- Үҙ рәхмәтенә, Үҙе биреп торған ниғмәттәргә лайыҡ булған кешеләр юлына төшөрөүен, дөрөҫлөк менән йәшәргә ҡеүәт биреүен һорап ялбарыу, ғибәҙәт ҡылыу.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "БАЙЫҠ" РУХЫНДАҒЫ БАЛАЛАР...

## майҙан тотто Күгәрсендә

**Күгәрсен районының "Мораҙым тарлауығы" үҙенең хозур ҡосағына тағы ла кескәй бейеүселәрҙе йыйҙы. Башҡортостан Республикаһы Президенты призына быйыл бишенсе тапҡыр уҙғарылған башҡорт бейеүен башҡарыусы балаларҙың "Байыҡ" республика конкурсы Гала-концертында төрлө райондарҙан һәм ҡалаларҙан 3 йәштән 15 йәшкә тиклемге 500-гә яҡын бала ҡатнашты. Башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи мираҫын һаҡлау, үҙешмәкәр халыҡ ижадын популярлаштырыу, һәләтле йәштәрҙең милли хореографияға ҡыҙыҡһыныуын көсәйтеү маҡсатында ойошторолған был бәйгегә Ҡырғыҙстан, Төньяҡ Осетия, Сыуашстан, Татарстандан һәм Әстерхан өлкәһенән ҡунаҡтар ҙа килде һәм "Байыҡ" бейеү ярышы төрлө милләттәрҙең мәҙәни яҡтан үҙ-ара аралашыу байрамына әүерелде.**

**(Дауамы 11-се биттә).**




Гран-при яулаусыц Искәндәр Әҙелғужин.

✔ Юғары структураларҙағы коррупция күренештәрен шулай уҡ оператив юҡ итеү, уларға тейешле яҙаһын биреү бик һирәк килеп ишетелә. Бындайҙар барыбер бер ниндәй байлыҡ һәм аҡсаларына ла яҙанан ҡасып ҡотола алмаясаҡ.



ИШАРА

# ХАҠТАР АРТА...

## ә беҙ түҙәбеҙ

**1 июлдән торлаҡ-коммуналь хеҙмәтенә түләүҙәр хаҡы артыуы тураһында гәзиттәрҙән уҡып, төрлө телетапшырыуҙарҙы ҡарап, бөтөнләй буталдым. Шул хәлдәргә бәйле тағы бер көләмәс иҫкә төштө. Бәлки, ул был үҙгәрештәргә бәйле лә түгелдер. Шулай ҙа һөйләйем әле.**

Төрмәлә ултырыусыларҙы саф һауа һуларға алып сығалар. Түнәрәк буйлап аҙ ғына йөрөүҙәре була, һаҡсы хөкөм ителеүселәрҙе барлай башлай. "Иванов!" тип ҡысҡырыуға, Иванов тура баҫып, "Мин бында!" тип яуаплай. Бер аҙ ғына ваҡыт үткәс, һаҡсы тағы "Иванов!" тип һөрән һала. Ивановтың, "Мин бында!" тигәне ишетелә. Аҙ ғына ваҡыттан һуң һаҡсы тағы ла "Иванов!" тип тамаҡ йыртa һәм Ивановтың,"Мин бында!" тигән яуабы ишетелә. Ошо өсөнсөгә ҡысҡырыуынан һуң һаҡсы тантаналы итеп:"Кайҙа китә алаһың инде һин, Иванов, ишектәр йоҙаҡлы бит..." - ти.

Ниндәйҙер мәғәнәһеҙ көләмәс, тип әйтер уҡыусы, тик был әлеге мәғәнәһеҙ йәшәйешебеҙгә оҡшаған бит. Иҫемдә, бынан бер нисә йыл элек үк коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтарҙың 100 процентҡа еткәнсе арттырасаҡтарын иғлан иткәйнеләр. Ошо йылдар буйы хаҡтар артыуын дауам итә, уның күләме баяғы планлаштырылған 100 процентты ла ашып китте шикелле инде. Иҫәбе-хаҡыры юҡ. Счетчиктар ҙа ҡуйып ҡаранылар. Ул счетчиктарҙың хаҡы тулыһынса аҡланып та өлгөрмәне, идаралыҡтан мастер килеп: "Кулланыу ваҡыты үткән, электр энергияһына ла, һалҡын һәм йылы һыуға ла яңы счетчиктар ҡуйырға", тигән яҙыу ҡалдырып китте. Тағы ла Дөйөм йорт сығымдары (ОДН) тигәндәре өҫтәлде хәҙер. Йәгни һин счетчиктарыңдағы күрһәткестәр буйынса даими түләп тә, һинең подъезыңда йәшәүсе икенсе берәүҙең счетчиктар ҡуймай, һыуҙы, йылыны, газды күңеле теләгәнсә ҡулланғаны өсөн дә түләйһең булып сыға инде.

Ә әле уйлап сығарылған субсидияны халыҡтың мейеһенә "Һеҙ меҫкенһегеҙ" тигән хисте көсләп һеңдерергә тырышыу, тип ҡабул итмәй булмай. Субсидия тураһында хәбәр таралған көндәрҙә танышым Тәнзилә апай шулай тип һөйләп торҙо: "Беҙҙең подъездағы бер бүлмәле фатирҙарҙа башлыса 75-85 йәшлек яңғыҙ әбейҙәр йәшәй. Күбеһенең балалары ла, башҡа ҡараусылары ла юҡ. Ошо оло йәштәге инәйҙәрҙең ҡайныһының субсидия юллап йөрөргә хәле етер икән?" Эйе, бында ла аңлашылмаған мәлдәр байтаҡ. Беренсенән, фатирҙа яңғыҙ пенсионер теркәлгәнен торлаҡ идаралығында беләләр бит. Ул пенсионерҙың күпме пенсия алыуын Пенсия фондынан белешеп була. 80-85 йәшкә еткән ололар меҫкенләнеп субсидия юллап йөрөмәһен өсөн фатир хаҡын түләүҙәргә ошо мәғлүмәттәрҙе идаралыҡ үҙе индерә алмаймы икән ни?

Бына шулай йәшәйбеҙ. Хаҡтар арта ла арта, халыҡ түләй ҙә түләй, түҙә лә түҙә. Ҡайҙа китә алаһығыҙ һеҙ, "ивановтар", ишектәр йоҙаҡлы бит...

**Айгөл АХУНОВА.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Гәзиттебеҙҙең 5-се битендә "Ишеттегеҙме әле?" рубрикаһында автор ҡуйған һорауға яуап бар. Йәғни июль айы квитанцияларынан күренеүенсә, субсидиялар суммаһы автоматик рәүештә иҫәп-хисапҡа индерелгән. Тимәк, ул тиклем насар түгел хәлебеҙ, түҙәбеҙ әле...**

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## *Хаҡ хөкөм Ерҙә генә түгел, Күктә лә бар бит әле. Уныһы тураһында ни уйлайһығыҙ?*

(Башы 1-се биттә).

***Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА, яҙыусы:*** Был донъяла Аллаһы Тәғәлә тыйған әмерҙәр байтаҡ. Шуларҙың береһенә генә туҡталайыҡ. Мәҫәлән, ҙур гонаһ һаналған бурлыҡ кеүек хурлыҡлы күренеш тураһында булыр һүҙем. Хосусилаштырыу, оптималләштереү кеүек етлекмәгән күренештәр тормошобоҙға бик күп зыян килтереүенә һәр беребеҙ шаһит. Был, бер яҡтан, ҡаҙна малына ҡул һуҙыусылар өсөн бик йәтеш "шаршау" ролен үтәй. Ә коррупция ниндәй кимәлгә - иң сиккә кимәлгә килеп етте бит! Власть әһелдәренең бер төрлө һөйләп, киреһен эшләү гәҙәте лә шайтан ҡушҡанса йәшәү бит ул. Иманынан яҙған бәғзе берәү анһат юл менән байыуҙы хатта ки гонаһ тип түгел, ә оҫталыҡ тип ҡабул итә башлай. Байлыҡ яратыу, муллыҡҡа ынтылыу әҙәм балаһына тыумыштан бирелгән, ләкин ул кешенең нәфсеһенә һынау ҙа бит. Урлашыу, бурлыҡ - Аллаһы Тәғәлә тыйған ҡаты әмер. Һәр ҡылған ғәмәл өсөн хисап бирергә тура киләсәген уйламаймы бындай ҡомһоҙҙар? Бәлки, улар ҡотолоп ҡалырына өмөт итәләр? Тик нисек итеп? Әллә харам юл менән йыйған байлыҡтарын мохтаждарға таратып биреп, сауап алырға йыйыналармы? Изге Китапта әйтелгәнсә, Хисап көнө барыбер киләсәк. Бөтәһе лә бәндәнең Аллаһ ҡулҡанды үтәй алыуы, Аллаһты яратыуы һәм Унан ҡурҡыуы аша баһаланасаҡ. Ошоно белә күрә лә ҡайһы берәүҙәрҙе кеше хаҡына ҡул һуҙырға, харам мал йыйырға нимә мәжбүр итә һуң? Беҙҙә ҡаҙнаны юҡ итеүселәр һәр ваҡыт һыуҙан ҡоро сыға. Кибеттән икмәк йә колбаса урлаған кешене тоталар, хөкөмдә йәһәт кенә сығаралар, ә бына юғары структураларҙағы коррупция күренештәрен шулай уҡ оператив юҡ итеү, уларға тейешле яҙаһын биреү бик һирәк килеп ишетелә. Бындайҙар барыбер бер ниндәй байлыҡ һәм аҡсаларына ла яҙанан ҡасып ҡотола алмаясаҡ, әлбиттә, уларҙы Әхирәттә гәҙелдәрҙән-гәҙел хөкөм - Ҡыямәт көнө, һорау алыу көтә. Ата-бабаларыбыҙҙы ошондай ҡомһоҙлоҡтан, гонаһҡа инеүҙән нимә тотоп торған һуң? Иман, әлбиттә. Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең йәшәү рәүеше, сөннәте үрнәк булған уларға. Шөкөр, арабыҙҙа бөгөн дә иман юлына ынтылғандар, нәфсеһен тыя белгәндәр бар, бәхеткә. Күберәк булһын ине улар...

***Асия ҒӘЙНУЛЛИНА, сәсәнә, Сибай ҡалаһы ағинәйҙәр ҡоро рәйесе:*** Һуңғы 80-90 йыл эсендә гонаһтың ни икәнен дә белмәгән тәрбиәһеҙ, Аллаһыҙ бер быуын үҫеп сыҡты. Октябрь революцияһынан һуң динде иҫкелек ҡалдыҡы тип иғлан итеп, мәсеттәрҙе емереп, хәҙрәт һәм муллаларҙы Себергә һөрөүҙән башланды бөтәһе лә. Халыҡты көсләп имандан айырҙылар. Бәлки, ана шуның гонаһын кисерәү булғандыр ҙа әле артабан Бөтә донъя һуғышы башланып китеүе. Айырыуса ауыр гонаһтарҙың яҙаһын донъялыҡта күтәрергә лә тура килә әҙәм балаһына. Донъябыҙ тотҡаһы - әсәйҙәр ҡулында. Әйтелгән бит изге Китапта ла "Ожмах - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында", тип. Ошо изге ҡанунды боҙоусыларҙың ҡуйыйә барыуы бик борсой беҙҙе әлеге мәл. Ғүмер буйы бил бөгөп , эшләп тапҡан пенсия аҡсаһын талап алып, ҡартайып бөткән әсәһен ҡыуып сығарыу бер ни түгел хәҙер ҡайһы бер балаларға. Ата-әсәне рәнйетеүҙең, яңғыҙы бала тәрбиәләгән тол ҡатындарға һүҙ тейҙереүҙең гонаһы бик ҙур бит ул. Ошондай гонаһ өсөн әҙәм балаһына уның әжере Ҡиәмәт көнөн дә көтөп тормаҫтан, гәҙәттә, донъялыҡта һәм шундуҡ ҡайтарыла - был инде күп тапҡырҙар һыналған хәҡиҡәт. Шул уҡ ваҡытта йыш ҡына киреһенсә лә була: Ер йөҙөндә берәү күтәргеһеҙ гонаһтарға батып йәшәй, әммә бер ниндәй яза күрмәй. Шул саҡ уның тураһында "Аллаһ был әҙәмде нисек итеп Ер йөҙөндә йөрөтә икән?" тип аптырарға ла ярамай, тип вәғәз тотҡаны хәтерҙә бер дин әһеленең. Бәлки, Аллаһы Тәғәлә уның тәүбәгә килеп, хаҡ юлға баҫыуын көтәләр. Ә инде гонаһтарын танып, тәүбәгә килмәнә, тимәк, Аллаһты танымаһа, Ахирәттә ул тейешле яҙаһын аласаҡ, тип әйтелгәйне. Ҙурмы ул, бәләкәйме - гонаһһыҙ кеше юҡтыр ҙа донъяла, тормош бит, күп ваҡыт үҙең дә белмәҫтән-аңғармаҫтан йә булмаһа кемдендер "ярҙамы" менән гонаһҡа инеүең бик ихтимал. Иманһыҙ бәндә менән иманлыларҙың юлдары бына ошонда айырыла ла инде. Аллаһы Тәғәләне таныған иманлы кешеләрҙең өҫтөнлөгө шунда: ул бер хата аҙым эшләп ҡуя ҡалһа, уның тәүбә ҡылып, ялбарып һорап Раббыны бар. Гонаһтарҙы ярлыҡаусы, тәүбәләрҙе ҡабул итеүсе Аллаһыбыҙ бар. Аллаһы Тәғәлә тәүбә иткәндәрҙе ярлыҡап ҡына тора, шуға күрә лә әҙәм балаһы иманға килеп, тәүбә итеп йәшәй белергә тейеш, тип уйлайым.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Август аҙағына тиклем уҡыусыларыбыҙға 50665 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн 2013 йылғы хаҡтар менән, йәғни 378 һум 36 тингә яҙылыу мөмкинлеге бирелә. Сентябрҙән хаҡтар үҙгәрәсәк.**

● Шулай итеп, июль айында **2014 йылдың тәүге яртыһы өсөн** гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге 10 уҡыусыбыҙ - **Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● Июнь айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе Иглин районы Түбәнге Ләмәҙе ауылынан **Рәшиҙә Ғәбәйҙуллина**, Учалы районы Муса ауылынан **С. Фәхретдинова**, Кәрим ауылынан **Рәйфә Исхаҡова**, Әбйәлил районы Михайловка ауылынан **Фәнүзә Вәлишина**, Әбдрәш ауылынан **Шамил Хәсәнов**, Ейәнсура районы Өмбәт ауылынан **Исмәғил Искәнйәров**, Баймаҡ ҡалаһынан **Әлифә Шарапова**, Баймаҡ районы II Эткол ауылынан **Сәлимә Хәсәнова**, Ишембай ҡалаһынан **Рауил Әхмәров**, Белорет районы Ботай ауылынан **Нәбиулла Төхвәтуллин - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр";**

Күгәрсен районы Мораҡ ауылынан **Рая Янбетова**, Ҡырмыҫҡалы районы Ҡырмыҫҡалы ауылынан **А. Ҡускарова**, Илеш районы Үрге Йәркәй ауылынан **Көнһылыу Насретдинова**, Ауырғазы районы Толбазы ауылынан **Ләлә Хәмизуллина**, Әбйәлил районы Аҫҡар ауылынан **Роза Таһирова**, Әбдрәш ауылынан **Зөлфиә Әхмәтова**, Учалы районы Ҡоҙаш ауылынан **Рәйлә Усманова**, Благовещен районы Иҫке Илек ауылынан **Идиә Шәйхетдинова**, Хәйбулла районы Байгусҡар ауылынан **Мөнирә Моратова**, Сибай ҡалаһынан **Хәтимә Ишмөхәмәтова - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ булды.

● Беҙҙең сайт: www.**kiskeufa.ru.** Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Республика Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы эш сәфәре менән АҠШ-та булды. Сәфәрҙең тәүге көнөндә делегация вәкилдәре Рәсәйҙең Техас штаты Хьюстон ҡалаһындағы Генераль консулы, АҠШ-тағы Рәсәй-Америка Сауҙа палатаһы вәкилдәре менән осрашты. Ошонда уҡ эшлекле даирәләр менән бизнес-конференция ойошторолдо, уларға Башҡортостан менән танышыу мөмкинлеге бирелде. Шулай уҡ Техастың административ баш ҡалаһы Остинда һөйләшеүҙәр булып үтте, ике яҡлы хеҙмәттәшлек мөмкинлектәре ҡаралды.

✔Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Өфөләге ҙур төҙөлөш объекттары менән танышты. Төҙөлөп ятыусы "Әсә һәм бала" перинаталь үҙәге 2015 йылдың башында сафҡа индереләсәк, тип көтөлә. Ә 12 мең квадрат метр майҙанды биләйәсәк аквапарк төҙөлөшө быйыл октябрҙә тамамланасаҡ. Әле күңел асыу комплексының эсендә биҙәү эштәре башланған. Тағы бер медицина объекты - позитрон-эмиссия һәм компьютер томографияһы диагностика үҙәге илдә беренселәрҙән булып Башҡортостанда барлыҡҡа киләсәк. Ул пациенттарҙы быйыл уҡ ҡабул итә башлаясаҡ. Октябрь проспекты "Дан бульвары" туҡталышы янындағы ер аҫты үткәүеле иһә быйыл сентябрҙә файҙаланыуға тапшырасаҡтар.

✔Ауырғазыла ауыл халҡының мәшғүллеген тәьмин итеүгә, тауар етештереүҙе арттырыуға булышлыҡ итеүсе "Йәнле ауыл" проекты уңышлы тормошҡа ашырыла килә. БР Президенты Рөстәм Хәмитов Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә был башланғысты ыңғай баһаланы һәм башҡа райондарҙы ла ауырғазылар тәжрибәһен өйрәнергә һәм үҙләштерергә саҡырҙы.

✔БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев әйтеүенсә, буласаҡ парламент һайлауҙары оло конкурентлыҡ шарттарында үтәсәк - бер депутат мандатына 11-12 кеше, ә бер мандатлы һайлау округтарында 6-лап кандидат дәғүә итә. Әле бер мандатлы һайлау округтарына 444 кандидат күрһәтелгән. Кандидаттарҙы теркәү 31 июлдә тамамлана. Дөйөм алғанда парламент һайлауҙарында 19 сәйәси партия ҡатнашасаҡ.

**✓ *Ислам дине буйынса өс осраҡта ғына ашығыу шайтан фиғеле һаналмай: беренсенән, мәрхүмде ҡуйырға ашығыу, икенсенән, намаҙға ашығыу, өсөнсөнән, еткән улыңды өйләндерергә, еткән ҡыҙыңды кейәүгә бирергә ашығыу.***

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# АШЫҠҠАН - АШҠА БЕШКӘН,

## әкрен барған - ҡуянға еткән...

**Ашығыу, ҡабаланыу тураһында бик күп мәҡәл-әйтемдәр бар. Шуларҙың бер нисәүһе: "Ашығыу - шайтан фиғеле", "Ашыҡмағандың ите бешә, ашыҡҡандың бите бешә", "Ашыҡҡан ашҡа төшөр", "Ашыҡҡан ашһыҙ ҡалыр", "Ашыҡҡан күҙгә аҡ төшә", "Ашыҡҡан юл алмаҫ", "Ашыҡҡандан аҡыл һорама" һ.б.**



Бер ауылда ярлы ғына ҡарт йәшәгән. Уның күҙ терәп торған берҙән-бер байлығы батшалар көнләшерлек күк аты булған. Ундайын көслө, йүгерек һәм күркәм һынлы ат әйләнә-тирәлә бүтән бер кемдә лә булмаған. Барыһының да күк атҡа күҙе ҡыҙған. Мал хужаһына үҙе теләгән әйбергә атын алмаштырыуын һораусылар ҙа табылған. Әммә ҡарт уларға:

-Ул миңә ат түгел, ә яҡын дуҫым. Ә яҡын дуҫҡа нисек хыянат итмәк кәрәк? - тип яуап ҡайтарған.

Ҡарт нисек кенә ярлы булмаһын, атын һорап килеүсе һәр кемде ошо рәүешле кире ҡаға килгән. Бер көн иртән һарайына инеп ҡараһа, атының юҡлығын күргән ҡарт. Ҡарттың ҡайғыһын уртаҡлашырға тотош ауыл халҡы йыйылып киткән.

-Бына һин ярыҡ ялғаш янында тороп ҡалдың, олатай. Ә бит беҙ һиңә килер бер көн - атыңды урлаясаҡтар, тип әйттек. Тыңлашманың. Әгәр ҙә беҙҙе тыңлап, атыңды һатҡан булһаң, бөгөн кеҫәңдә иҫәпһеҙ аҡсаң ятыр ине. Хәҙер һарайыңда атың да, кеҫәңдә аҡсаң да юҡ. Бөгөн һинән дә бәхетһеҙ кеше юҡ, - тигән ҡартты йәлләүсе ауылдаштары.

-Кишер сәйнәмәгеҙ, зинһар өсөн. Һарайымда атым юҡ, тип кенә әйтһәгеҙ, шул еткән. Ҡалғаны - буш һүҙ. Һарайҙа атым булмауы бәхетһеҙлекме, бәхетме? Был хаҡта берәү ҙә әйтә алмай, - тип оторо яуаплаған ауылдаштарына ҡарт.

-Башыңды алйотҡа һалма, олатай. Әлбиттә, беҙ аҡыл эйәһе йә фәйләсүф түгел, әммә бында бер хәҡиҡәтте аңламаҫҡа ул тиклем үк ахмаҡ түгелбеҙ: ниндәйен шәп, тирә-яҡҡа дан атыңды урлап китһендәр ҙә, быны бәхетһеҙлек түгел тип әйтергә кемдең теле әйләнһен? - тип һаман да ҡарттың зитына тейеүҙе дауам иткән ауылдаштары.

-Нисек уйлаһағыҙ ҙа, үҙ иркегеҙҙә. Мин иһә бында бер генә нәмәне күрәм: һарайым буш икән, тимәк, атым унда юҡ. Әммә мин был хәлде бәхеткә йә бәхетһеҙлеккә юрарға ашыҡмайым. Эйе, әлегә һарайымда атым юҡ, әммә иртәгә нимә булырын кем белгән? - Һаман да үҙ туғыҙын туғыҙ итергә мантышҡан ҡарт.

Ауылдаштары, ҡарт ҡайғыһынан бер төрлөгә әүерелгән, аҡылы инәле-сығалы булып киткән, тип уйлаған. Уны электән үк хыялый зат итеп белгән ауылдаштары. Әгәр ҙә ҡарттың урынында улар үҙҙәре булһа, күптән атты ҡиммәт хаҡҡа осороп, олоғайған көнөндә ҡайғы белмәй йәшәрҙәр ине. Ҡарт утын һатып ҡына көн күргән булған. Элек урмандан утынды аты менән алып ҡайтҡан булһа, хәҙер иһә, бөтөнләй тере етем хәлендә ҡалған.

Әммә ун биш көн үткәндән һуң ҡарттың юғалған аты көтмәгәндә ҡайтып төшкән. Тик бер үҙе генә ҡайтмаған күк ат, ә үҙенең артынан бер өйөр ҡырағай аттарҙы эйәрткән. Был хәлде күреп, ауылдаштары йәһәт кенә уның йорто янына йыйылған.

-Ғәжәп. Һин, ысынлап та, хаҡ булғанһың, олатай. Атың һиңә бәхетһеҙлек түгел, ә бәхеттең үҙен эйәртеп алып ҡайтты. Беҙ һинең хәлеңә баһа ҡуйырға ҡабаландыҡ, ғәфү ит беҙҙе, олатай? - тигән улар күҙҙең яуын алған ҡырағай аттарға ҡарап.

-Һеҙ тағы ла юҡты һөйләйһегеҙ. Эйе, атым ҡайтты, үҙенең артынан бер өйөр ҡырағай йылҡы өйөрө апҡайтты. Әммә артабан ни булырын бер кем дә белмәй. Был хәлдең бәхеткәме-бәхетһеҙлеккәме икәнен дә беребеҙ ҙә белә алмай. Китаптың бер генә битен, бер генә юлын уҡып сығып, тотош китапҡа баһа биреп буламы ни? Тормош бит дарьялай киң, ә һеҙ уның хаҡында бер генә тамсыға ҡарап фекер йөрөтәһегеҙ. Нимәгә шул тиклем ашығаһығыҙ. Тынысланығыҙ, миңә бер аҙ ял итергә мөмкинлек бирегеҙ, - тигән ҡарт уларҙы уғата аптыратып.

Ауылдаштары ғәжәпләнеүҙән бот сапҡан. Уларҙың күҙ алдына хатта ҡарттың күк атына эйәреп ҡайтыусы ҡырағай аттарҙы һатыуҙан килгән аҡсаның төҫтәре йымылдашҡан, алтын тәңкәләр сылтыраған тауыштар ишетелгән...

Артабан ҡарттың берҙән-бер улы ҡырағай аттарҙы менгегә өйрәтергә тотонған. Бер аҙна ла үтмәгән, ул аттан ҡолап, аяғын һындырған. Был хаҡта ишетеп, ауылдаштары шундуҡ ҡарттың өйөнә килеп етә һалған.

-Эйе, олатай, һин һәр ваҡыт хаҡлы. Атыңдың үҙенең артынан йылҡы өйөрө эйәртеп алып ҡайтыуы һиңә бәхетһеҙлеккә булған икән. Ана бит, берҙән-бер улың ғүмерлеккә ғәрип булып, ҡартайған көнөңдә таянысһыҙ тороп ҡалдың, - тигәндәр улар ҡартты йәлләп.

-Һеҙ һаман да ҡуймайһығыҙ, ауылдаштарым. Бәхетһеҙбәхетле, тип ҡабатлап, нисек телегеҙ талмайҙыр? Улым аяғын һындырған икән, был һис тә бәхетһеҙлекте аңлатмай. Ғүмер айырым миҙгелдәрҙән тора, уның береһенән генә сығып, тотош ғүмергә баһа биреп буламы икән? Ҡарар сығарырға ҡабаланмайыҡ, алдағын күҙ күрер, - тигән ҡарт ауылдаштарының үҙен йәлләүҙәрен ҡабул итмәйенсә.

Ошо һөйләшеүҙән һуң тағы ла бер нисә көн үтеүгә, һуғыш башланған һәм уның тәүге көнөнән ауылдың барлыҡ һауһаҡ ир-аттарын ил һаҡларға алып киткәндәр. Бары тик ҡарттың аяғы һыныу сәбәпле атлай алмаған берҙән-бер улы ғына һуғышҡа бармай тороп ҡалған. Ауыл халҡы бер урынға йыйылып, һәр береһе үҙенең ҡайғыһын башҡаларға еткергән. Һуғышта кемеһенең ире, кемеһенең улы һәләк булыуы хаҡында ҡара ҡағыҙҙар килә башлаған. Һуғышҡа китеүселәрҙең береһенең дә имен-һау ауылға әйләнеп ҡайтырына өмөт ҡалмаған, сөнки уларҙың иленә һуғыш асыусы ил ҙур һәм уларҙың еңере алдан уҡ билдәле булған.

Ошо саҡ ауыл халҡы ҡарттың ҡасандыр әйткән һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп, уның янына килгән.

-Ғәфү итсе беҙҙе, олатай, һин тағы ла хаҡһың. Берҙән-бер улыңдың аттан ҡолауы һинең бәхетең булған икән. Улың ғәрип булһа ла, иҫән һәм ул һинең янында. Ә, ана, беҙҙең малайҙар киттеләр ҙә юғалдылар. Улар иҫәнме-юҡмы, бер кем дә әйтә алмай, - тигән улар ҡартҡа үҙ ҡайғыларын еткереп.

-Һеҙ тағы ла һығымта яһарға ҡабаланаһығыҙ, туғандар. Һеҙҙекеләр һуғышта, минеке өйҙә, әммә алда ни булырын әле беребеҙ ҙә әйтә алмай. Уны белһә, бер Алла ғына белә инде. Был хәлебеҙ бәхетме, бәхетһеҙлекме? Йә, шунан, нисәмә йылдар буйына ҡабалан юрауҙарығыҙҙан нимә килеп сыҡты инде? - тип уларға яуап биргән ҡарт.

Был риүәйәттә ашығып ҡарар сығарыуҙарҙың, ҡабалан юрауҙарҙың ниндәй һөҙөмтәгә алып килгәнлеге хаҡында һүҙ бара. Ысынлап та, ундағы фекерҙәргә өҫтәп, тағы ла нимәләр әйтеүе лә мөмкин түгелдер. Ислам дине буйынса, мәҫәлән, бары тик өс осраҡта ғына ашығыу шайтан фиғеле һаналмай: беренсенән, мәрхүмде ҡәбер эйәһе итергә, ҡуйырға ашығыу, икенсенән, намаҙға ашығыу, өсөнсөнән, еткән улыңды өйләндерергә, еткән ҡыҙыңды кейәүгә бирергә ашығыу. Ә ҡалған барлыҡ осраҡтарҙа ла ашығыу - шайтан фиғеле.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөрйән район Советы Әхмәтйәнов Динир Әсғәт улын контракт буйынса Бөрйән районы хакимиәте башлығы итеп тәғәйенләргә ҡарар итте.

✓М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетынан философия фәндәре докторы Самат Мөхәмәтйәнов һәм Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһы табибы Ғайсар Мөхәмәтйәнов Бөтә Рәсәй иң яҡшы ғилми китап конкурсы лауреаттары тип табылды. Бындай юғары баһаға улар "Мейенең төҙөлөшө һәм текст өҫтөндә эшләү алымдары" тигән хеҙмәттәре өсөн лайыҡ булды. Был конкурс Ватан мәғарифын үҫтереү фонды тарафынан ун беренсе тапҡыр уҙғарыла.

✓Ошо көндәрҙә Башҡортостандан 36 уҡытыусының "Мәғариф" өҫтөнлөклө милли проектҡа ярашлы уҙғарылған Бөтә Рәсәй конкурсында еңеп сығыуы һәм Рәсәй Мәғариф һәм фән министрлығының Почет грамотаһына, РФ Президенты премияһына лайыҡ булыуы тураһында билдәле булды. 200 мең һумлыҡ гранттар йола буйынса Уҡытыусылар көнөндә тапшырыласаҡ.

✓Өфөлә "Беренсе тапҡыр беренсе класҡа. Етем балаларға ярҙам күрһәт" хәйриә акцияһы башланды. Ул ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендә Опека һәм попечителлек идаралығы тарафынан ойошторола. Ярҙам Өфөләге балалар йорттарында һәм уларҙы алыштырған ғаиләләрҙә беренсе класҡа барасаҡ 120 малай һәм ҡыҙға күрһәтеләсәк. Мәғлүмәт өсөн телефон: 8(347) 241-43-90 - "Ғаилә" үҙәге.

✓"Мега" сауҙа үҙәгенең икенсе ҡатында Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың йәйге уҡыу залы асылды. Милли китапхана менән сауҙа үҙәгенең берлектәге проектының төп маҡсаты - китапҡа ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, балаларҙы, йәштәрҙе уҡыуға йәлеп итеү. Килгән һәр кеше уҡыу билеты алып, йәйге залға инә ала. Зал 31 августа тиклем көн һайын иртәнге 10-дан киске 10-ға тиклем асыҡ.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов 2014 йылды республикала Мәҙәниәт йылы тип иғлан итеү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы.

**"Башинформ"дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ӨС ЙЫЛҒА АЛДАН

**Быйыл, мәғлүм булыуынса, ҡала бюджеты беренсе тапҡыр өс йылға ҡабул ителде. Әлбиттә, иртәгәһе нимә булыры билдәһеҙ заманда өс йылды алдан планлаштырыу һәм күҙаллау еңел түгел. Ләкин мөмкин булған мәсьәлә.**

Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Илгиз Насретдинов журналистар менән осрашып, ҡала бюджетының ярты йылға үтәлеше менән таныштырҙы. Алты айҙа Өфө бюджетына дөйөм алғанда 8 миллиард 857 миллион һум, йәғни былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 600 миллионға (37 процент) күберәк килем ингән. Шул иҫәптән республика һәм федераль бюджеттарҙан 4 миллиард 314 миллион (былтырғыға ҡарағанда 11 процентҡа күберәк) һум бирелгән. Ә инде сығымдар 9 миллиард 823 миллионға еткән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 17 процентҡа күберәк.

Бюджеттың үҙкилемдән тупланған төп өлөшө физик шәхестәрҙең һалымынан (46 процент), ер участкаларын ҡуртымға биреүҙән (17 процент), дөйөм килемгә һалымдан (12 процент), торлаҡ булмаған фонд объекттарын һәм ер участкаларын һатыуҙан (9 процент), милекте ҡуртымға биреүҙән (7 процент) килгән килемдән тора. Былтырғы менән сағыштырғанда инде һалым һәм һалым булмаған килем күләме 3,7 процентҡа артып, 162 миллион һумға еткән.

Сығымдарға килгәндә, бюджеттың 69 проценты социаль өлкәгә һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡҡа йүнәлтелә. Сығымдарҙың иң ҙур өлөшө мәғарифҡа тура килә - 42 процент. Алты айҙа белем биреү өлкәһенә 4 миллиард 132 миллион һум бүленһә, шуның 50 проценты ошо системала эшләүселәргә эш хаҡы түләүгә киткән. "РФ Президентының 2012 йылдың 7 майындағы Указына ярашлы, балалар баҡсалары тәрбиәселәренең уртаса айлыҡ эш хаҡы 19,3 меңгә, уҡытыусыларҙыҡы 25 меңгә, йәғни төбәктәге уртаса айлыҡ эш хаҡы күләменә еткерелде", - тине Илгиз Диҡҡәт улы.

Ә бына һаулыҡ һаҡлау тармағы буйынса финанслау күләме былтырғыға ҡарағанда ике тапҡырға тиерлек кәмегән һәм 387 миллион тәшкил итә. Быны инде мотлаҡ медицина страховкаһы средстволары иҫәбенә бер каналлы финанслауға күсеү менән аңлатырға мөмкин.

"Социаль сәйәсәт"кә сығымдар 2012 йыл менән сағыштырғанда 22 процентҡа артып, 293 миллион һумға еткән. Бында төп сығымдар булып етем балаларҙы һәм ата-әсә тәрбиәһенән мәхрүм балаларҙы ҡарау, балаларҙың мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында булыуы өсөн ата-әсә түләгән сумманың билдәле бер өлөшөн компенсациялау, балаларҙың йәйге һауыҡтырыу лагерҙарында булыуы ла инә.

Әйткәндәй, "Дәүләт иҡтисады" пункты буйынса сығымдар 1 миллиард 326 һум тәшкил итә. Был күрһәткес былтырғы менән сағыштырғанда ике тапҡырға күберәк. Әммә шуныһы бар: был пункттағы сығымдарға граждандарҙың тормошон һәм йәшәү кимәлен яҡшыраҡ, сифатлыраҡ, унайлыраҡ итеү өсөн алып барылған эштәр инә. Уларҙы беҙ һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә күреп торабыҙ: юлдар яҡшыра, төҙөлөш бара, тирә-яҡ төҙөкләндерелә, һ.б.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# "FORBES"ТЫҢ БАҺАҺЫ...



## тағы бер ҡат раҫланды

**Былтыр республиканың баш ҡалаһы халыҡ-ара баҫма баһаламаһы буйынса Рәсәйҙең "Бизнес өсөн иң яҡшы 30 ҡала" исемлегендә икенсе урынды яулаһа, быйыл да тотороҡлолоҡ һаҡлап, ҡаҙанышының нигеҙле булыуын тағы ла раҫланы. Был исемлек административ баҫымдың аҙлығы, финанстар алыу мөмкинлеге, квалификациялы эшсе көстәре, эшҡыуарҙарға лояль ҡарашта булған һалым чиновниктары күрһәткестәре буйынса төҙөлә. Һәм Өфө икенсе йыл рәттән унда икенсе урында килә.**

Шулай уҡ инвестициялар ылыҡтырыу көсө буйынса ла баш ҡалабыҙ алдынғы халыҡ-ара кредит агентлығы баһаһына ярашлы, юғары урында тора. Был хаҡта ҡала округы хакимиәтендә Өфөнөң ярты йылға социаль-иҡтисади хәл-торошо буйынса уҙғарылған матбуғат конференцияһында ҡала хакимиәтенең иҡтисад идаралығы начальнигы Ольга Краснова белдерҙе.

Төп күрһәткестәр ыңғай үҫешкә эйә һәм был ҡала хужалығы тармаҡтарының, социаль өлкәнең тотороҡло эшләүен раҫлай. Мәҫәлән, йылдың тәүге яртыһында сәнәғәт предприятиелары продукцияһын тейәп оҙатыу, хеҙмәт күрһәтеү буйынса 247, 8 миллиард һумлыҡ эш башҡарылған. Үҫеш 4,5 процент тәшкил итә. Шулай уҡ беренсе кварталда төрлө финанслау сығанаҡтарынан 13,8 миллиард һумлыҡ инвестиция йәлеп ителгән. Йәғни былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 24 процентҡа күберәк. Әлеге ваҡытта ҡала округы территорияһында дөйөм инвестиция күләме 154 миллиард һум булған 94 проект тормошҡа ашырыла. Улар 19 мең эш урыны булдырасаҡ. Бынан тыш, яҡынса инвестиция күләме 77,5 миллиард һум тәшкил иткән тағы 53 проект әҙерләнеп бөтөү алдында. Был проекттар ҙа тормошҡа ашырылғанда, өҫтәмә рәүештә тағы ла 6 мең эш урыны барлыҡҡа киләсәк.

Йылдың тәүге яртыһында төҙөлөш тармағында ла бихисап эштәр башҡарылған. Мәҫәлән, 254 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлөп, сафҡа индерелгән. Ҡаланың транспорт инфраструктураһы ла камиллаша, коммуналь йүнәлештәге төҙөлөш тә планға ярашлы дауам итә. Шулай уҡ социаль маҡсатлы төҙөлөштәр ҙә әүҙем алып барыла. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, физик культура һәм спорт өлкәләрендә яңынан-яңы объекттар төҙөлә һәм был эш туктаусыҙ алып барыла.

Ҡаланы үҫтереү стратегияһының өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһе булып халыҡтың уңайлы тормошон тәьмин итеү тора. Был йәһәттән граждандарҙы авария торошондағы йорттарҙан барлыҡ уңайлыҡтары булған фатирҙарға сығарыу буйынса программа тормошҡа ашырыла. Әлеге ваҡытта программаға ингән 6779 кешенең 6229-ы яңы фатирлы булған да инде. Шулай уҡ күп фатирлы йорттарға капиталь ремонт үткәреү, йорт алды территорияларын төҙөкләндереү буйынса ла эштәр бара һәм улар төрлө сығанаҡтарҙан финанслана.

Ғөмүмән алғанда, иҡтисадтың барлыҡ тармаҡтары ла тотороҡло үҫешә һәм был халыҡтың мәшғүллегенә лә йоғонто яһамай ҡалмай. Алты айҙа, былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда, теркәлгән эшһеҙҙәр һаны 922-гә кәмеп, 6575 кеше тәшкил иткән. Ә вакантлы урындар, киреһенсә, 26 процентҡа артып, 23631 берәмеккә еткән. Һәм бында һаман шул бер үк күренеш күҙәтелә: вакансияларҙың 83 проценты - эшсе һөнәрҙәре, ә эшһеҙ граждандарҙың 60 проценты инженер-техник хеҙмәткәрҙәр вазифаларына дәғүә итә.

Һәм иң ҡыуандырғаны: ыңғай үҫеш балалар һанының артыуына ла булышлыҡ итә. Йылдың биш айында баш ҡалала тәбиғи үҫеш 1419 кеше тип билдәләнә. Ә инде яңы тыуған сабыйҙар һаны былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 374 кешегә артып, 6632 кеше тәшкил иткән.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ФАЙҘАҒА БУЛҺЫН

**Өфө ҡала округы хакимиәтендә ошо арала ғына Франция, Швейцария компаниялары вәкилдәре менән эшлекле осрашыуҙар үтте. Уларҙың төп маҡсаты - Өфөлә канат юлын төҙөү мөмкинлеген өйрәнеү һәм ошоноң буйынса фекер алышыу ине. Ошондай йүнәлештә махсуслашҡан компанияларҙың бер-бер артлы баш ҡалаға килеүе дәғүәселек мөнәсәбәттәре, тимәк, һайлау һәм хеҙмәттәрҙең үҙкимммәтен түбәнәйтеү мөмкинлеге хаҡында һөйләй.**

Ҡала башлығы фекеренсә, канат юлы ҡиммәтле аттракцион түгел, ә әлегәсә булған транспорт тәрҙәренә өҫтәмә булырға һәм яңы төҙөләсәк бер транспорттан икенсеһенә күсеп ултырыу үҙәктәренә килеп ҡушылырға тейеш.

Франция етештереүселәре донъяла ғына түгел, Рәсәйҙә, аныҡлап әйткәндә, Түбәнге Новгородта үҙ проекттарын тормошҡа ашырған да инде. Түбәнге Новгородта асылғанына бер йыл ғына үтеүгә, ул яртылаш ҡына эшләүенә ҡарамаҫтан, 2 миллион халыҡты хеҙмәтләндереп өлгөргән. Пассажирҙар иһә элек автомобиль транспорты менән сәғәт ярымда үткән араны хәҙер 12 минутта үтә икән. Бынан тыш, канат юлының энергияны аҙ тотоноуы, юғары КПД-ға эйә хәүефһеҙ транспорт булыуы асыҡланған. Техника ҡатмарлы климат шарттарына яраҡлаштырылған һәм хатта һауа температураһы минус 60 градусҡа төшкәндә тиклем эшләй ала.

Әлегә был ике компания аныҡ маршруттар буйынса канат юлының ни өсөн кәрәклеген техник-иҡтисади нигеҙләп, иҫәп-хисап документтары әҙерләй.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан халҡы медицина полистарын яңы берҙәм өлгөләгеһенә алыштыра. БР Мотлаҡ медицина страховкаһы фондынан хәбәр итеүҙәренсә, уны алыштырыу срогы сикләнмәгән. Яңыһын алғанға тиклем иҫке өлгөләге медицина полисы менән ҡулланырға мөмкин. Һорауҙар менән Фондтың (347) 272-58-64 телефонына мөрәжәғәт итергә була.

✓Әбйәлил районында күренекле сәсән, мәғрифәтсе-шағир Шафиҡ Әминев-Тамьянизың тыуыуына 155 йыл тулыуға арналған оло сара булып үтте. Унда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе Риф Тойғонов, яҙыусылар, ғалимдар ҡатнашты.

✓"Рәсәй-1" телеканалында барған "Рәсәй 10" конкурсы 29 сентябргә тиклем дауам итә. Тәүге тур һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандан ике объект - Торатау, Йөрәктау шихандары һәм Салауат Юлаев һәйкәле лидерҙар иҫәбендә килә. Икенсе турҙа шихандар - 32-се, Салауат Юлаев һәйкәле 47-се урында. Битараф булмағандар http://10russia.ru/ сайтында тауыш бирә ала.

✓Өфө полицияһы өй ҡарағын эҙләй. Оператив мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ҡараҡ тиҫтәләгән фатирҙы талауҙа ғәйепләнә ала. Унын уғрылыҡ үҙенсәлеге шундай: ул фатир ишеген асҡыстар яратып аса, ҡиммәтле әйберҙәр һәм аҡса урлай. Енәйәтсе бар халыҡ эштә саҡта "һунарға" сыға. Ул бер йорт подъезындағы күҙәтеү камераһына эләккән дә инде. Тышҡы билдәләре: 45-45 йәштәрҙәге ир, буйы 170-175 см. Мыҡты кәүҙәле, сәстәре ҡара. Полиция шикле кешене күреүселәрҙән ошо телефондар буйынса шылтыратыуҙарын һорай: 279-31-27, 8-937-317-33-17, 8-927-938-38-48 йәки 02. Файҙалы мәғлүмәт тапшырыусы бүләкләнәсәк.

✓25 июлдән 15 сентябргә тиклем "Өфөгаз" туҡталышынан "Дәүләт циркы"на тиклемге трамвай линияһы капиталь ремонтҡа ябыла. Был осорҙа Р. Зорге урамы буйлап өҫтәмә троллейбустар, шулай уҡ яңы 224р автобусы маршруты ебәреләсәк.

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# СИРАТТАРҘА ТОРОУ КӘРӘКМӘНЕ

**Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәттәре өсөн 1 июлдән тарифтар артыуға ҡарамаҫтан, ошо айға алынған квитанциялағы һандар әллә ни ҡурҡыу тыуҙырманы, сөнки хаҡтар артыу иҫәбенә компенсация суммаһы автоматик рәүештә иҫәп-хисапҡа индерелгәйне инде. Ғариза яҙып, документтар йыйып, ҡайҙалыр барып, төн уртаһынан сиратҡа баҫыу кәрәк булманы.**

Хәтерегеҙҙәлер, 2012 йылда властарҙа коммуналь түләүҙәргә хаҡтарҙың 12 проценттан да юғарыраҡ үрләүенә юл ҡуймау хаҡында һүҙ барғайны. Ә инде шунан артып киткән хәлдә айырманы ҡапларға вәғәҙә бирелде. Хәлдәр тап шулай килеп сыҡты ла: эҫе һыу менән йылылыҡҡа тарифтар 12 процент сиген үтеп китте. Сығымдарҙы адреслы социаль түләүҙәр (АСВ) ҡапларға тейеш ине, ләкин был осраҡта ҡулланыусыларҙы бюрократия тамуғын әллә нисә әйләнеп сығыу көтә: кәрәкле документтар туплап, Республика субсидия үҙәгенә ғариза яҙыу, бының өсөн иге-сиге күренмәгән сираттарҙа тороу... Халыҡты бындай яфаларҙан аяп, ҡала властары АСВ-ны квитанцияларға автоматик рәүештә күсерелеүсе компенсацияға алыштырҙы.

- АСВ-нан айырмалы, компенсация артынан бер кемгә лә бер ҡайҙа ла барып йөрөү кәрәкмәй, бөтә мәғлүмәтте йорт менән идара итеүсе компаниялар бирә, - ти Өфө ҡалаһы торлаҡ-коммуналь хужалыҡ идаралығы директоры урынбаҫары Альфред Зиннәтуллин.

Иғтибар иткән булһағыҙ, июль өсөн килгән квитанция ҡағыҙының өҫкө уң яҡ мөйөшөндә иҫәпләп сығарылған дөйөм коммуналь түләүҙәр хаҡы, аҫтараҡ - компенсация суммаһы, өсөнсө юлда ҡулланыусы түләргә тейешле реаль сумма күрһәтелгән. Компенсация түләү өсөн аҡса ике бюджеттан: сирек өлөшө - ҡала, ҡалғаны республика бюджетынан ҡапланасаҡ.

Компенсация тураһындағы ҡарар, һис шикһеҙ, дөрөҫ булды, тип иҫәпләй белгестәр. Тәү сиратта был аҙ тәьмин ителгән халыҡҡа ярҙам. Ә инде хаҡтар артыуға килгәндә, был ҡотолғоһоҙ хәл. Уның иҫәбенә коммуналь предприятиелар эшләй, аҡсаны ремонтҡа һәм туҙған инженер селтәрҙәрен алмаштырыуға йүнәлтә.

Шуныһын да әйтеп китеү кәрәк: июлдә дөйөм йорт ихтыяждары(ОДН) өсөн дә хаҡтар кәметелде. Хөкүмәт ОДН буйынса түләүҙәрҙең иҫәп-хисап формулаһын үҙгәртте һәм хәҙер ҡулланыусылар барлыҡ сығымдарҙың 6 процентын ғына түләй, ҡалғаны - идара итеүсе компаниялар иңендә.

# МӘКТӘП ФОРМАҺЫ - БУШЛАЙ

**Яңы уҡыу йылына ла күп ҡалманы. Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте быйыл 1-се класҡа уҡырға барасаҡ 44 мең балаға мәктәп формаһын бушлай бирергә вәғәҙә итә. Бының өсөн ҡаҙнанан бөтәһе 43,5 миллион һум аҡса бүленәсәк.**

Әйткәндәй, был форма "запас" кейем булыр, ахырыһы: комплект жилет менән жакеттан тора. Ҡәҙимге форманы ата-әсәләр үҙ зауыҡтарына ярашлы һайлаһа, бүләк итеп биреләсәк кейем бөтәһе өсөн дә бер төрлө буласаҡ.

- Бер комплекттың хаҡы 990 һум,- ти БР Мәғариф министрлығы баш белгесе Ирина Иванова. - Форманың ниндәйерәк фасонда булыуы әлегә хәл ителә.

Буласаҡ беренселәрҙең кәүҙә үлсәмдәрен алғандар ҙа инде. Министрлыҡта әйтеүҙәренсә, форманы 1 сентябргә өлгөртә алмаҫтар, ахыры, шуға күрә уны уҡыу йылы дауамында бирәсәктәр. Тик шуныһы: балалар бит ай үҫәһен көн үҫә, тиғәндәй. Һуңлап бирелгән форма үлсәмдәре уларға ярарлыҡ икән - билдәһеҙ, тик шуныһы бәхәсһеҙ: яңы уҡыу йылынан мәктәп формаһын мотлаҡ индереү ҡарала: балалар уҡыуға тотанаҡлы төҫтәге "эш" кейемендә йөрөйәсәк. Сағыу һәм үтә күренмәле кейем, биҙәүестәр тағыу тыйыла. Дини атрибутикаға ла рөхсәт булмаясаҡ.

**Фирүзә ИШБАЕВА әҙерләне.**

# ТӨП ИҒТИБАР - ЮЛҒА!

**Баш ҡалала бына ике йыл рәттән йәйгеһен юлдарҙың төҙөклөгөнә, уның төҙөлөшөнә ҙур иғтибар бирелә. Былтыр был йәһәттән урамдарҙа транспорт йөрөгән һыҙаттар арттырылып, юлдар киңәйтелгәйне. Шул иҫәптән 39 объектта капиталь ремонт үткәрелеп, дөйөм майҙан 1 миллион квадрат метр тәшкил итеп, 320 мең тонна асфальт-бетон ҡатнашмаһы түшәлгәйне.**

Быйыл иһә ҡаланың 24 объектында юлдарҙы ремонтлау бара. Юғары көсөргәнешкә дусар булған участкаларҙы асфальтлау заманса технологиялар һәм геотекстиль селтәр ҡулланып башҡарыла. Шулай уҡ материалдар махсус ойошторолған юл төҙөлөш лабораторияһында талаптарға ярашлылыҡҡа тикшереү үтә, етешһеҙлектәр асыҡланғанда инде, уларҙы төҙәтмәй тороп, бер кем дә артабан эшен дауам итә алмай.

Асыҡланыуынса, водителдәр юл сатына тиклем 50 метр ҡала кирегә бороло мөмкинлеген биргән юл билдәһен ыңғай баһалаған. Шул уҡ ваҡытта юл саттарының машиналарҙы һәм йәйәүлеләрҙе үткәреү һәләте артҡан.

Әлеге ваҡытта "Үсмерҙәр китапханаһы", "Дан бульвары" туҡталыштарында йәйәүлеләр өсөн ер аҫты юлдары төҙөлөшө тамамлана. Бынан тыш та бик күп эштәр планлаштырыла. Әйткәндәй, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте иһә 2015 йылға тиклем "Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге" республика маҡсатлы программаһын раҫланы. Уны тормошҡа ашырыу өсөн 1 миллиард 166 миллион һум аҡса бүленәсәк.

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ҮҘ ТЕЛӘГЕ БУЙЫНСА

**Йәш ярымға тиклемге баланы ҡарау буйынса отпускыламын, шул уҡ ваҡытта тулы булмаған эш көнө шарттарында эшләп тә йөрөйөм. Үҙемдең ризалыҡ менән мине командировкаға ебәрә алалармы?**

- Эйе, ебәрә алалар. РФ Хеҙмәт кодексының 259-сы статьяһына ярашлы, өс йәшкә тиклемге балаһы булған ҡатындар түбәндә күрһәтелгән ике осраҡта эш буйынса командировкаға ебәрелә, өҫтәмә рәүештә, шулай уҡ төнгө ваҡытҡа, ял һәм эш көнө булмаған байрам көндәрендә эшкә йәлеп ителә ала:

- әгәр балаһы ҡатын был хаҡта яҙма рәүештә ризалыҡ бирһә;

- әгәр бындай эш тәртибе медицина һығымтаһы менән йәш әсәгә тыйылған булмаһа.

Тағы шуныһы ла мөһим: балаһы хеҙмәткәрҙе уның командировкаларҙан һәм башҡа төр өҫтәмә эштәрҙән баш тартырға хоҡуғы булыуы тураһында яҙма рәүештә ҡул ҡуйҙырып таныштырыу мотлаҡ.

## МӨМКИНЛЕККӘ ҠАРАП

**Әсәйемә 51 йәш, һаулығы буйынса уны еңелерәк эшкә күсереү кәрәклеге тураһында белешмәһе бар. Уға даими рәүештә больничныйҙа булып алырға кәрәк. Ул эшләгән ҡошсолоҡ фабрикаһында еңелерәк эш биреү мөмкинлеге юҡ. Был осраҡта, пенсияға тиклем эшләргә бирмәйенсә, уны эштән сығара алалармы?**

- Үкенескә ҡаршы, быны шулай килеп сығыуы бик ихтимал. Медицина күрһәтмәһе буйынса хеҙмәткәрҙе икенсе эшкә күсереү мөмкинлеге булмаһа йәки ул үҙе күсергә теләмәһә, мәсьәләне хәл итеүҙең ике төрлө юлы ҡарала.

1. Әгәр икенсе эшкә күсереү дүрт айҙан да күберәк осорға кәрәкмәһә, ә бындай мөмкинлек булмаһа, хеҙмәткәрҙең эш урыны (вазифаһы) һаҡланған хәлдә ул эшенән ситләтеп торола. Был осраҡта уға эш хаҡы түләнмәй (закон менән башҡа төр осраҡ ҡаралмаған булһа).

2. Хеҙмәткәрҙе икенсе эшкә күсереү дүрт айҙан да күберәк осорға йә иһә даими тәртиптә кәрәк булһа, ә бындай мөмкинлек юҡ икән, хеҙмәт килешеүе өҙөлә.

Эшсе РФ Хеҙмәт кодексының 77-се статьяһындағы 1-се өлөштөң 8-се пунктына ярашлы эштән бушатыла ( "Хеҙмәткәрҙең медицина күрһәтмәһенә ярашлы икенсе эшкә күсеүҙән баш тартыуы йәки эш биреүсенең тейешле эш урыны менән тәьмин итә алмауы").

## ҮҘЕГЕҘҘЕҢ ҠАРАМАҠТА

**Сит илгә сәфәргә юлланғанда страховка полисы һатып алыу тәртибе нисек атҡарыла?**

- Сәйәхәтселәрҙе страховкалау полисы сит илдә турист өсөн кәрәк булыуы ихтимал медицина сығымдарын, шулай уҡ бәхетһеҙлек осраҡтарында ҡаралған сумманы үҙ эсенә ала. Багажды - юғалыуҙан һәм өсөнсө шәхестәр алдында граждандыҡ яуаплылығын да страховкалап, полисҡа өҫтәмә индерергә була. Полисты ҡаплау дәүмәлен үҙ аллы һайлаған осраҡта 30-50 мең доллар/евро һәм унан да юғарыраҡ суммаға иҫәп тота алаһығыҙ. Был сумма, ҡағиҙә булараҡ, больницала дауаланып сығыуға етә. 14 көнгә бындай полистың хаҡы - 23-52 доллар/евро. Әгәр әүҙем ял (серфинг, тау саңғыһы һ.б.) һайлаһағыҙ, юғары хәүеф ихтималлығын күҙҙә тотоусы "экстремаль" полис алығыҙ. Полисты офистарҙа ғына түгел, онлайн аша ла алырға мөмкин.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Гастрит булғанда

❖ Был сирҙән ауышҡаҡ сәлләбаш (пион уклоняющийся, марьин корень) тамыры файҙалы. 1 ҡалаҡ ваҡланған тамырға 3 стакан һыу ҡайнатып ҡойорға ла, 30 минут төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан ярты сәғәт алда, 1-әр ҡалаҡлап эсергә.

❖ 1:1 өлөш нисбәтендә бал менән таҙа спиртты болғап, ашар алдынан ҡабул итергә. Быны элекке шахтер мәрхүмә Мансурова Әсҡәпъямал инәй өйрәтте, мине дауаланы, гастритты онотторҙо.

❖ Юғары кислоталы гастрит булһа, 1 балғалаҡ ваҡланған меңъяпраҡты 1 стакан ҡайнар һыуға һалып, 5-7 минут әкрен утта ҡайнатырға, һөҙөргә. Ай буйына көнөн 3 мәртәбә яртышар стакан эсергә. Был дауа ашҡаҙан һәм бөйән эсәге йәрәхәтенән дә файҙаланыла.

❖ Шулай уҡ ашҡаҙан ауыртҡанда, үт ҡыуығы борсоғанда гөлйемеш сәскәләрен сәй кеүек эсергә. 15-30 минут төнәтеп, көнөнә 3-4 мәртәбә яртышар стакан эсегеҙ.

### Күҙҙәргә аҡ төшһә

❖ Арыш икмәген бешереп, эҫе мәлендә уртаһын киҫеп тишек яһарға, уны стакан менән ҡапларға. Стаканда барлыҡҡа килгән быу тамсыларын күҙгә тамыҙырға.

### Әрем дауаһы

❖ Яҙғы, йәйге эштәр мәлендә ҡул, башҡа тән яралары алына, ҡан аға башлай. Әремдең йәшел япрағын тышҡы ҡан китеүҙән, тамыр һуҙылғанда шул урындарға ябаһың.

❖ Әрем шулай уҡ аҙ ҡанлылыҡтан һәм эстәге төрлө паразиттарҙы бөтөрөүҙә лә ҡулланыла.

### Күҙҙәр арығанда

❖ Хәҙер телевизор, компьютер донъяны баҫып алды, уларға текәлеп ултырып, кешенең күҙе тала. Күҙҙәр ҡыҙара, арый. Шуға күрә, көнөнә 2 мәртәбә күҙҙәргә һыу ҡушылған 2-3 тамсы бөтнөк майы тамыҙырға кәрәк. 100 мл һыуға 1 тамсы май ҡушырға. Бөтнөк майы аптекаларҙа һатыла.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Әле булһа бер проблемалары тураһында ла уртаҡлашмай улар Халиҡ ҡарт менән. Аҡса, кәңәш, ярҙам һорамайҙар, тип, быға тиклем ҡыуана ғына ине. Бөгөн килеп, уларҙың тормошонда уның өсөн урын юҡ икәнлеген аңланы.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ауыҙ эсе һәм тын юлы ауырыуҙарына бәйле им-том

**Күк йүтәлдән им-том.** Күк йүтәл булһа, әүәле күк күгәрсен тотоп, уны һуйып, өс тапҡыр ҡанын тамыҙып алып, ауырыуға эсергәндәр. Күк таш менән дә имләү бар.

Күк йүтәлгә күк кейем, күк һырға, күк муйынсаҡ таҡҡандар. Шулай уҡ күк кәзәнең, күк һыйырҙың һөтөн дә эсергәндәр.

**Күк быумаға им-том.** Әүәле күк быума булһа, күк атлы кешенән дарман һорағандар.

**Күгәрсен йөрәге ашатыу.** Күк йүтәлгә күк күгәрсенде һуйып, йөрәген ашатҡандар.

**Ҡорама юрған име.** Йүткергәндә, ҡорама юрған япҡандар.

## Үңәс рәнйеүен имләү

**Үңәс рәнйеүе бар.** Иң тәүҙә оҙонса биҙҙе белеү өсөн үңәсте тотоп ҡарарға кәрәк. Уны ун бармаҡ менән әкрен генә тотоп ҡарайһың. Ошо мәлдә тиренең ҡайҙа эсе, ҡайҙа һыуыҡ ере беленә. Ул кинәт эсей йә кинәт һыуый. Кеше йота алмай һәм һәйбәт тын алмай. Быны белгәс, тамсылап йод эсерергә кәрәк. Йод эсергәндә ошо әпсен уҡыла:

*Бисмиллаһир-рахмәнир-рахим, тфү, тфү, тфү!*
*Име-томо шул булһын! Тфү, тфү, тфү!*

**Ҡомасауға (сырхыуат) әпсен.** Ҡомасау ауырыуы булһа, ошо әпсенде әйтеп өшкөрәләр ине әүәле:

*Иҙән аҫтында тимер букән,*
*Уның өҫтөндә ҡарсыҡ,*
*Әнәһе ҡоңғор, ебе ҡыҙыл,*
*Име-томо шул булһын!*

**Сиҡаҡлауға им-том.** Сиҡаҡлаһаң, һине кемдер һөйләй, тиҙәр. Шуға уны туктатыр өсөн бөтә таныш-тонош, зат-бот исемен әйтеп сығырға кәрәк. Һине һөйләгән кешенең исемен әйтһәң, сиҡаҡлау бөтә икән.

**Сиҡаҡҡа ете йотом һыу.** Сиҡаҡ тотһа, доға уҡып, ете йотом һыу әсәләр.

**Осколоҡ тотһа, им-том.** Осколоҡ тотһа, доға уҡырға кәрәк. Осколоҡ та һинең менән доға уҡый, имеш. Изге доға уҡый-уҡый, ул һинән китә, тиҙәр.

## Теш ҡортона им-том

**Теш ауыртыуын тәкөрөү.** Теш һыҙлағанда тилебәрән бешереп, шуның һыуы менән имләйҙәр. Бының өсөн һыуға ҡорт доғаһы уҡыйҙар. Шунан шул һыу менән ауыҙҙы өс мәртәбә сайҡап түгәләр. Сайҡағанда түбәндәге әпсенде әйтәләр:

*Сыҙыр булһаң, сыҡ, ҡортом!*
*Ятыр булһаң, ят, ҡортом!*
*Сыҡ, ҡортом! Сыҡ, ҡортом!*

Сайҡалған һыуҙы кеше йөрөмәгән ергә сығарып түгәләр.

Түккәндә ошо әпсенде әйтәләр:

*Сәбәп минән, сихәт Алланан,*
*Сәбәп минән, сихәт Алланан.*

**Теш һыҙлағанда тилебәрән төтөнө.** Теш һыҙлаузы икенсе төрлө ҡорт рәнйеүе тиҙәр. Ышаныуҙар буйынса, ауырыу тештәрҙәге ҡорттарҙан барлыҡҡа килә. Тилебәрән төтөнө менән ыҫлау, ҡорт доғаһын әйтеү ҙә дауалауҙың традицион ысулы булып тора. Быны өсөн доғаны уҡып, тәүҙә тилебәрәнде туң май менән майлайҙар, унан уны табаға һалып ҡыҙҙыралар. Тилебәрәнде төбөндә тишеге булған консерва банкаһы менән ҡаплайҙар. Шунан тишек аша ҡамыш һабағы ярҙамында төтөндө ауыртҡан тешкә табан һуралар, һурғанда ҡорт доғаһын уҡыйҙар:

*Алтын башлы атағыҙ,*
*Айыры ҡойроҡ анағыҙ,*
*Күптер һеҙҙең балағыҙ,*
*Ҡылдан нәҙек булған ҡорт,*
*Ялан ерҙән килгән ҡорт,*
*Кил, ҡортом, кил, ҡортом,*
*Әйүп пәйғәмбәрҙең хөрмәтенә.*
*Кил, ҡортом, кил, ҡортом.*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ

# ҮКЕНЕСТӘРЕҢ БУЛМАҺА...

## үҙеңде бәхетле тип иҫәплә

**Халиҡ ҡарт һуңғы осорҙа китап уҡыуға әүәҫләнеп китте. Ятһа ла, торһа ла - ҡулында китап, хатта ашарға ултырғанда ла ҡалдырмай уны. Ҡарсығы тәүҙә уның был ҡылығын әһәмиәтһеҙ белдереп ҡарағайны, һуңынан ҡартайған һайын еңмешләнгән хәләленә ҡаршы килмәне.**

Күп балалы татыу ғаиләлә үҫкән Мәҙинә әбей тауыш-тынһыҙ сәй эсеүҙе йәштән мөрхәтһенмәне. Берберенә эшләгән эше, бешергән ашы өсөн рәхмәт әйтеү, кәңәш-төңәш итеү, һис юғында, оҙон көн буйы күрешмәгәндән һуң, яйлап һөйләшеп ултырыу сараһы һымаҡ күрә ине аш мәлдәрен. Бигерәк тә киске аш ваҡытын көтөп ала ине. Унда инде бөтә ғаиләһе - биш улы, ире түңәрәк өҫтәл артына йыйыла. Эштән арып ҡайтҡан кешене маҙаһыҙламаһын тип, бәләкәй саҡтарында балаларын аталары ҡайтҡансы ашатып ҡуйыр ине. Һуңғараҡ, үҙҙәре ҡалаҡ тотоп ашай башлағас, бер-берейәнең үҡсәһенә баҫып үҫеп килгән уларын үҙҙәре менән бергә ултыртты. Тик Мәҙинәгә, ниңәлер, теләгәнсә һөйләшеп, берейәнән-берейә алсағыраҡ уландары менән күңелле итеп гәпләшеп ултырырға насип булманы. Балалар баҡсаһында, мәктәптә күргән-ишеткәндәрен, көн буйы алған тәьҫораттарын һөйләй башлаһалар, атайҙары тыңлау түгел, оторо ярһып, ауыҙҙарын ябып ҡуйыр ине. Уларҙың артыҡ иркә, телдәр булыуын ҡатыһына япһарып, ризаһыҙлыҡ белдерҙе, ҡайһы берҙә хатта ҡулындағы ҡалағын өҫтәлгә бәреп тороп китер ине. Мәҙинә - түҙемле, аҡыллы ҡатын. Балаларын, атайҙарының ныҡ арып ҡайтыуын сәбәп итеп, бәләкәй саҡтағы кеүек алдан ашатырға күнегеп китте. Тик Халиҡ ҡатыны менән икәүҙән-икәү генә ҡалһа ла ҡәнәғәтләнеү кисермәне, йөҙөн сирып, үсеккән бала кеүек, өнһеҙтынһыҙ ашауын дауам итте. Туйғас, ауыҙы эсенән ниммәлер мөңгөрҙәне лә тороп китте, әллә шулай үҙенсә "әпәр" итте, әллә ҡатынына тәмле аш менән һыйлағаны өсөн рәхмәт әйтте. Мәҙинә уны ҡартайғансы аңламаны.

Хаҡлы ялға сығыуына тиҫтә йылдан ашыу үтте инде. Йәштән бер ҡыҙыҡһыныуы ла, яратҡан шөғөлө лә булмағас, тәүҙә Халиҡ үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәй аптыраны. Күршеһенә эйәреп, балыҡ ҡармаҡларға ла йөрөгән булды, әммә уға тиғән балыҡ, гел уның емен урап үтеп, күршеһенә эләгеүенә сыҙар хәле ҡалмағас, тиҙҙән был мауығыуын да ташланы. Баҡсасылыҡҡа ла барымы юҡ, был эште баштан уҡ тулыһынса Мәҙинәһенә, улдарына тапшырған. Шуға ла ҡартайған көнөндә белмәгәненә ҡыҫылырға теләмәне.

Ауылға ҡайтып, туған-тыумаһы араһында булырға ла, көс-кәре булып та, уларға хужалыҡ эшендә ярҙам итергә лә атлығып торманы. Йылына бер тапҡыр һөнәри байрамдары көнөндә мөҙҙәтле ялға киткән эш урынына барып килә лә, башҡаса халыҡ араһына ла сығып йөрөмәй. Ҡатыны менән парлашып йәки ғаилә менән концерт-маҙарға ла йөрөргә, сәйәхәт итергә лә яратманы.

Шулай, хаҡлы ялының бер нисә йылы диванға ҡырын ятып, телевизор ҡарап үтте. Һуңғы йылдарҙа ғына нисәмә йыл үҙ уҡыусыһын көткән китаптарға иғтибар итте. Өйөндә етерлек улар, йәштән, уҡыһа-уҡымаһа ла, китап йыйырға яратты. Бигерәк тә матур биҙәлеше китаптарға иҫе китте. Ундай осраҡта авторына ла, жанрына ла ҡарамай алыр ҙа, китап шкафының иң күренгән урынына ҡуйып, һоҡланыр ине. Китаптар араһында бите бер тапҡыр ҙа асылмағандары ла юҡ түгелдер, сөнки ул ваҡытта уның уҡырға форсаты ла булманы, яратманы ла, бушҡа ваҡыт үткәреү кеүек ҡабул итте. Хәҙер иһә бына бер нисә йыл инде китап уҡып, йоҡоһонан да, ашынан да яҙыр хәлгә килде.

Күптән түгел уның ҡулына "Батшаларға бүләк, йәки урта быуаттағы әхлаҡи васыяттар йыйылмаһы" эләкте. Уны, әлбиттә, ҡасан, ҡайҙан алғанын иҫләмәй ҙә, уның кәштәгә нисек эләккәнен дә оноҡҡан.

Һәр юлын йотлоғоп уҡыны ул. Бер бүлеген уҡып сыға ла, уны бөгөнгө көҙләктән сығып, төрлөсә фекерләй, анализлай, сағыштыра. Уларҙың һәр берейәнең ниндәй ҙур мәғәнәгә эйә булыуын, һәр берейәндә ҙур аҡыл-хазина һаҡланыуын, уҡыған һайын зиһене артыуын тойҙо. Фәҡәт батшаларға ғына ҡағылған этика нормалары түгел икән ул. Дөйөм кешелектең әхлаҡи ҡағиҙәләре йыйылған унда.

Уны нисә ҡат уҡып сыҡҡандыр Халиҡ, иллә-мәгәр һәр бүлекте ятлап тигәндәй алды, үҙенең тормошон күҙ алдына килтерҙе. Нисек дөрөҫ йәшәмәгән ул! Эх, был яҙмалар ҡулына саҡ ҡына алданыраҡ эләкһәме - белер ине нисек йәшәргә, эшләргә! Ғүмер буйы "эш" тип, ғаиләһен ҡайғыртманы, эшендә иһә, балалары күп булыуына һылтанып, балалар баҡсаһынамы, мәктәпкәме йыйылышҡа, конференцияға барыуҙы сәбәп итеп, башҡаларҙан алданыраҡ ҡыҫылырға тырышты. Ә үҙе балаларының ҡайһыныһы нисәнсе класта уҡығанын да белмәгәндер әле. Ярай, нисек тә буй еткерҙеләр, өйләнеп, үҙ аллы тормош юлына баҫтылар. Әле булһа бер проблемалары тураһында ла уртаҡлашмай улар Халиҡ ҡарт менән. Аҡса, кәңәш, ярҙам һорамайҙар, тип, быға тиклем ҡыуана ғына ине. Бөгөн килеп, уларҙың тормошонда уның өсөн урын юҡ икәнлеген аңланы.

"Дүрт нәмә дүрт нәмәне тыуҙыра: тиҫкәрелек - хурлыҡты, асыу - үкенеүҙе, яман теллелек - дошманлыҡты, ялҡаулыҡ - ауыр яҙмышты" тигән бүлекте уҡығас, тороп уҡ китте ҡарт. Ниндәй хаҡ һүҙҙәр яҙылған, тип уйланы. Берейәнә лә баш бирмәйем, тип, эшендә лә, өйөндә лә күпме тиҫкәреләнде ул. Нимәгә өлгәште һуң? Әсе теле менән күршеләрен, хеҙмәттәштәрен генә түгел, иң яҡын кешеләрен - ҡарсығын, уларын, туғандарын үҙенән биҙҙерҙе, ситләтте. Уларға яҡты йөҙ күрһәтеүҙе, йылы һүҙ әйтеүҙе кәмһенеү, түбәнһенеү кеүек күрҙе ул. Асыуын теҙгенләй алмай, эргәтирәһендәгеләрен күп тапҡыр үҙенә ҡаршы ҡуйҙы, шуның өсөн аҙаҡ үҙе күпме үкенде, әммә юҡҡа рәнйеткәне, янылышҡаны өсөн ғәфү үтенергә теләмәне, теләмәне генә түгел, был уй башына ла инеп сыҡманы...

Ялҡаулыҡ ауыр яҙмышҡа илтә, тиелә. Үҙен ялҡау тип һанамаһа ла, Халиҡ ҡарт артығын эшләргә яратманы шул. Эшендә үҙенә йөкмәтелгәнде, әлбиттә, еренә еткереп үтәне, әммә арттырып, күберәк эшләргә атлығып торманы. Эргә-тирәһендәгеләргә лә ярҙам итергә ашыҡманы, ҙур коллективта эшләһә лә, шәхсән үҙен генә ҡайғыртты, үҙе тураһында ғына уйланы. Шуға ла хеҙмәттәштәренең берейә лә уның менән "разведкаға барырға" риза булмаҫ ине.

...Халиҡ көҙгө алдына килде лә үҙенең күҙҙәренә текәлде. Оҙаҡ ҡарап тора алманы ул. Бер нөктәгә текәлеүҙәнме, күҙе йәшкәҙәне лә, күҙ алдары томаланды. Эргә-тирәһендәгеләрҙе ғүмер буйы күҙ ҡарашы менән ҡурҡытып тотҡан ҡарт ҡарсығының, уландарының күҙенә лә шулай тура ҡарай алмағанын аңланы...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# АЙНЫРМЫ ҺУҢ ИРЕМ?

**Әсә кешенең балаһына теләгәне тормошҡа аша, тиҙәр ҙә ул. Бәләкәй саҡта миңә әсәйем гел "бәхетле бул, аҡыллы кейәүгә сыҡ " тип әйтә торғайны. Был теләктәр фәрештәнең "амин" тигән сағына тура килмәнеме, әллә башҡа сәбәптәнме, уның изге юрауҙары тормошҡа ашманы...**

Бөтөнләй бәхетһеҙмен тип әймәйем үҙемде, сөнки көткән донъям, ҡорған ниғеҙем, алма кеүек балаларым бар. Өлкән улым бер йыл элек кенә мәктәпте тамамланы һәм юғары уҡыу йортона уҡырға инде. Ул милли көрәште үҙ итә, оҫта ғына һүрәт төшөрә. Беҙҙә ҡыуандырып, тик "яҡшы" билдәләренә генә уҡый. Ҡалған икәүһе мәктәптә белем ала. Улар ҙа кластарында иң алдынғы уҡыусыларҙан һанала. Бөтә йыуанысым ошо ғәзиздәремдә.

Баларымдың атаһы буласаҡ егет менән бүлмәлә бергә йәшәгән әхирәтемдең ауылына ҡунаҡҡа барған ваҡытта танышҡайныҡ. Фәнир ине уның исеме. Мин ултырмаға барған йорттоң күршеһендә генә йәшәгән оҙон буйлы мөләйем егет башта миңә күҙ ҡыҫып ҡына, яҡын килергә баҙнат итмәй йөрөнө. Тиҙҙән яҡындан танышып, аралаша башланыҡ. Хистәрҙең бөтөнләй ҡайнарланыуын аңлағас, ғаилә ҡороп, бергә йәшәп алып киттек. Фәнирҙең дуҫтары менән булғанда

*ХӘҠИҠӘТ БЫЛ!*

**Каталон картаһы тәү тапҡыр өфөләләргә 2007 йылда Башҡортостан менән Рәсәй берләшеүенең 450 йыллығы айҡанлы үткәрелгән конференцияларҙың береһендә күрһәтелә. Үҙем был конференцияла ҡатнаша алмағайным, ошо хәбәрҙе ишетеү менән карта хаҡында мәғлүмәт туплай башланым.**

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫ - Каталон атласында



Картаның төп нөсхәһен табыуға күп кенә ваҡыт китте. Ул Өфөлә банк системаһында эшләгән бер кешелә булып сыҡты. Ниндәй маҡсаттарҙа карта менән ҡыҙыҡһыныуымды белгәс, ул миңә уны бүләк итте. Һуңынан был карта буйынса мин бер нисә доклад эшләнем, 3-сө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ултырышында сығыш яһаным.

2010 йылдың аҙағында археологтарҙың Өфөлә Волга, Себер, Урал буйы ғалимдары ҡатнашлығындағы ҙур конференцияһы булып үтте. Конференцияла мин "Урта быуат карталарында башҡорт ҡалалары" тип аталған доклад менән сығыш яһаным. Ҡайһы бер ғалимдар сығышымда килтерелгән дәлилдәр менән килешмәйенсә, мине тәнҡитләп сыҡтылар. Ошо конференциянан һуң миңә Санкт-Петербург ҡалаһының Көнсығыш белеме университетынан шылтыраттылар. "Беҙ һеҙҙең Урта быуаттарҙа Өфө ҡалаһы урынында Башҡорт ҡалаһы булыуы хаҡындағы сығыштарығыҙ менән башҡаларҙы ышандыра алмауығыҙ хаҡында ишеттек. Беҙҙә һеҙҙең ҡараштарығыҙҙы дәлилләгән мәғлүмәттәр бар. Питерға килегеҙ, беҙ һеҙҙе улар менән таныштырасаҡбыҙ", тинеләр. Кисектермәйенсә, Санкт-Петербургҡа юлландым. Унда Александр Григорьевич Юрченко исемле ғалим менән осраштым. Ул үҙе Урта быуат карталары буйынса белгес, бик күп ғилми-тарихи китаптар авторы. Александр Григорьевич менән Каталон атласындағы Башҡорт ҡалаһына бәйле мәғлүмәт тупланған хеҙмәт яҙып, китап итеп сығарырға һөйләштек. Ул үҙенең ризалығын бирҙе һәм материалдары өсөн 750 мең тирәһе гонорар һорап, был аҡсаның уға Европа архивтары буйлап Башҡорт ҡалаһы хаҡында мәғлүмәт эҙләү маҡсатында кәрәк булыуын белдерҙе. Беҙ был китапҡа шулай уҡ башҡорт ғалимы Айбулат Вәли улы Псәнчиндың яҙғандарын да индерергә планлаштырғайныҡ. Был китап беҙгә Башҡорт ҡалаһы тирәһендә барған бәхәстәргә нөктә ҡуйырға мөмкинлек бирәсәк ине. Мин аҡса һорап, 2011 йылда республика Хөкүмәтенә мөрәжәғәт иттем, әммә беҙҙең үтенес ҡәнәғәтләндерелмәне. Шулай итеп, бик әһәмиәтле булыр хеҙмәт баҫылмай ҡалды.

Каталон картаһына килгәндә, ул Урта быуаттар картография фәненең иң уңышлы эштәренең береһе. Атлас 1375 йылда Пальма-де-Майоркала Абраам Крескес һәм уның улы Иегуда тарафынан арагон короле Хуан I һорауы буйынса эшләнгән. Унан алда төшөрөлгән карталар һәм төрлө сәйәхәтселәрҙең һөйләгәндәре Каталон атласының сығанаҡтары булып хеҙмәт иткән. Был карта компас линияларын ҡулланып эшләнгән. Ошоға тиклем төшөрөлгән карталарҙан айырмалы, Иерусалим картаның үҙәгендә урынлашмаған. Карта бөтә Евразияны үҙ эсенә алған һәм альбом рәүешендә төҙөлгән.

1381 йылда карта Франция короле VI Карлға бүләк ителә. Әлеге ваҡытта Париж ҡалаһының Милли китапханаһында һаҡлана. Был картаны беренсе тапҡыр Рәсәйҙә 1873 йылда Новороссийск университеты профессоры Ф.К. Браун баҫып сығара. Картала Алтын Урҙаның бер нисә ҡалаһы күрһәтелгән. Каманың һул яғында бөгөнгө көндә Өфө ҡалаһы урынлашҡан урында Pacherty ҡалаһын күрергә була. Был мәғлүмәт урта быуаттарҙа европалыларға башҡорттарҙың дәүләте, Башҡорт ҡалаһы билдәле булыуын раҫлай. Урта быуаттарҙа уҡ ошо картаға һәм башҡа сығанаҡтарға таянып, ғилми эштәр яҙыла. Уларҙа шулай уҡ башҡорттар, башҡорт ҡалалары хаҡында телгә алына.

**Нияз МӘЖИТОВ, тарих фәндәре докторы, профессор.**

---

һыра менән араҡынан баш тартмауын күрһәм дә, мөхәббәткә иҫереп, был хәлгә артыҡ иғтибар бирмәгәнмен. Башта ул да артыҡ иҫереп йәмһеҙләнеп йөрөмәне. Ир-ат ни, аҙыраҡ эсер инде, тип уйлағанмындыр күрәһең. Бер-бер артлы балалар тыуҙы. Бергә йәшәгәнгә биш-алты йыл да үтмәне, тыйылыуҙы ситкә ҡуйып, самаһыҙ төшөрә башланы ирем. Эштән ҡыҙмаса булып, күңелләнеп ҡайта ла, кеçәһенән тағы ла бер шешәне сығарып, байрам итә. Элек миңә һөйөп ҡараған күҙҙәрендә хәҙер асыу, ҡәнәғәтһеҙлек кенә сағыла. Ҡысҡырып, йәмһеҙ һүҙҙәр әйтеүҙән дә тартынмай башланы. Етмәһә, минең етешмәгән яҡтарымды өҫкә сығарырға маташа. Ултырған ерҙән йоҡлап китһә, уяна күрмәһен, тип, үҙем дә, балалар ҙа өй эсендә бесәй һымаҡ шым ғына йөрөргә тырышабыҙ. Иҫерек ир менән бер түшәктә йоҡлауҙың нимә икәнен эскән ирҙәрҙең ҡатындары ғына беләләр. Ул йоҡо аралаш алама һүҙҙәр ҡысҡыра, тибенә, туҡтауһыҙ ғырлай, төшөндә әллә кемде әрләй. Иртәгәһен нисек ҡыланыуын һөйләһәк, ышанмай, башҡа улай булмам, тип вәғәҙә бирә. Уның менән кеше араһында ла уңайһыҙ хәлгә ҡалып бөтәм. Туғандарға белдермәҫкә тырышһам да, күпме йәшерергә була, эштең ҡайҙа барғанын улар ҙа һиҙенә.

Үҙемдең ошолай йәшәүемде яҙмышым ҡушыуы тип ҡабул итәм инде хәҙер. Фәнир үҙе насар ҙа кеше түгел. Айыҡ сағында ҡатын-ҡыҙ эше тип тормай, ярҙамлаша, улдарыбыҙҙы ярата, ҡулына аҡса эләкһә, иң элек балаларға кәрәкле әйбер ала. Ул айыҡ саҡта йортобоҙ йәмләнә, бәхет ҡояшы тәүге көндәрҙәге кеүек яңынан яҡтыртҡандай тойола. Тик оҙаҡҡа түгел шул, яйы сыға ла тағы ла шешәгә тотона. Ни хәл итәһең, донъяһы шуға ҡоролған. Ауыл ерендә баҡса һөрһәң дә, бесән эшләйем тиһәң дә - шул эске...

Иремде ташлап китергә лә йыйындым бер килке, тик улдарымдың, атай, тип өҙгәләнеүен күҙ алдыма килтереп, туҡтап ҡалдым, өс бала унһыҙ нишләр? Китеп тә ҡайҙа барайым, кеше тупһаһында фатирһыҙ йөрөү ҡурҡыта. Ҡәйнәм-ҡайным да ҡыҙғаныс, яҡшы кешеләр, уларҙы ҡайғыға һалғым килмәй. Күңелемдең иң түрендә яныр-янмаç өмөт ята: бәлки, ирем айныр?

**ЙӘМИЛӘ.**

---

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙа бер ерҙә лә ҡошсолоҡ әһәмиәтле кимәлгә етмәгән. Шуға ла улар бары тик ҡаҙ һәм тауыҡ үрсеткән. Башҡорттар ҡасан ҡошсолоҡ менән шөғөлләнә башлаған, тигәндә, беҙ бары тик уларҙың XVIII быуаттың икенсе яртыһында ҡаҙ һәм тауыҡ аҫырағанын ғына беләбеҙ. Төньяҡ-көнбайыш башҡорттары тураһында И.И. Лепехин, йәйләүгә күскәндә ҡаҙ һәм тауыҡ тотоусылар уларҙы ҡышлау урынында үҙ аллы аҙыҡ табыуға ҡалдырып киткән; көҙөн инде ҡышлауға ҡайтҡанда күпме ҡош-ҡорт тере ҡалһа, шуның менән мөрхәтһенгәндәр, тип яҙған. XIX быуат һуңында, XX быуат башында ла башҡорттар үҙҙәре аҫыраған ҡош-ҡортҡа артыҡ иғтибарлы булмаған. Күл һәм йылға буйында йәшәүселәр, нигеҙҙә, ҡаҙ тотҡан. Ҡышҡылыҡҡа улар ике-өс инә, бер ата ҡаҙ алып ҡалған. Инә ҡаҙҙар йомортҡа һала башлаған апрель айында уларҙы талдан махсус үрелгән, диаметры 80 сантиметр булған ҡаҙ ояһына ултыртҡандар. Ояға һалам йәки күрән һалғандар. Бәпкәләр сыҡҡас, уларҙы ҡарау, хәстәрләү онотола. Йәйгеһен ҡаҙҙар бик һирәк осраҡта ғына йортҡа ҡайта. Ғәҙәттә, улар йылға йәки күл буйҙарында йөрөп, һалҡындар башланғас ҡына хужаларына ҡайтҡан. Ҡайһы бер ваҡыт башҡорттар ҡаҙ баҫырға ултырғанда уның аҫтына ҡыр ҡаҙҙарының йомортҡаһын да һалған.

Башҡорттар Урал буйында рустар ниндәй ҡаҙ аҫыраған, шул тоҡомло ҡаҙҙарҙы үрсеткән. Көҙ етһә, улар оса башлаған һәм ҡайһы берҙә бик алыҫҡа ла осоп киткән; ҡыр ҡаҙҙары менән иген баҫыуҙарына ла төшкән. Ҡаҙҙарҙың итен аҙыҡ итеп файҙаланғандар, ә мамығынан мендәр һәм түшәк эшләгәндәр.

Тауыҡтарҙы һәр ерҙә һәм ҡаҙҙарға ҡарағанда күберәк күләмдә аҫырағандар. Улар бары тик ҡышлау урынынан йәйләүгә алыҫҡа сығып киткән ғаиләләрҙә генә булмаған. Әгәр башҡорттар ҡаҙҙарҙы бер ни тиклем тәрбиәләһәләр, тауыҡтарға бөтөнләй иғтибар итмәгәндәр. Улар өсөн оялар, даими ябылған йәки ваҡытлыса япмалар төҙөмәгәндәр, ашатмағандар һәм бер иғтибар ҙа бүлмәгәндәр. Һөҙөмтәлә башҡорттарҙа ярымҡырағай тауыҡтарҙың айырым тоҡомо барлыҡҡа килгән. Улар бәләкәй һәм еңел булған, алыç араларға еңел генә оса алған һәм шәп йүгергән. Үҙ алдарына баҫып, үрсегән. Ҡырағайланған һәм үҙ аллыға әйләнгән башҡорт тауығы торлаҡ йорт эргәһендә үҙенә оя ҡорған. Бәпкә сығарғас, ул йыртҡыстарҙан бәпкәләрен һаҡлаған һәм хәүеф яҡынлашҡанда уларҙы ҡанаттары аҫтына йыйған. Башҡорттар тауыҡтарының бәпкә сығарыуын себештәр күҙгә салынғас ҡына белгән. Башҡорт тауығы сыҙам һәм талымһыҙ булған. Уның бигерәк тә ҡара-һоро, ҡуйы һары йәки ҡара төҫтәре киң таралған.

Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар тауыҡтарҙы йәйләүгә үҙҙәре менән алған. Миңә йәйләү эргәһендә уларҙы тау йылғалары буйындағы ағаслыҡтарҙа, ағаста ултырғандарын һәм бер ағастан икенсеһенә ҡорҙар кеүек осоп йөрөгәнен күрергә тура килде.

Ғәҙәти шарттар булғанда, тауыҡтар майҙа йомортҡа һалыуҙан туҡтай һәм бары тик икенсе яҙға ғына ҡабат йомортҡа һала башлай. Был бигерәк тә йәш тауыҡтарға ҡағыла. Ҡарт тауыҡтар иһә оҙағыраҡ һәм күберәк йомортҡа һала. Йәғни ҡомортҡа һалыу араһы ҡыçҡараҡ була.

Башҡорттар өйрәк тә үҫтергән, әммә бик һирәк һәм аҙ. Йышыраҡ улар ҡыр өйрәктәренең йомортҡаһын баҫҡан тауыҡ аҫтына һалған, ә көҙгөһөн үҫкән өйрәктәрҙең ҡанатын ҡырҡҡан. Башҡорттарҙың йорт ҡоштары араһында ҡыр өйрәктәренең дә осрауы ғәҙәти күренеш булған.

✓ *1938 йылдың 10 июле ул башҡорт халҡы өсөн ысын мәғәнәһендә ҡанлы йәкшәмбе була. Беҙҙең мәғлүмәттәр буйынса, тап ошо көндә башҡорт интеллигенцияһы тип иҫәпләнгән 43 кеше атып үлтерелә.*



**Халҡыбыҙ тарихында фажиғәле биттәр аҙ түгел. Күптән түгел Таңсулпан Бабичеваның ижади мәктәбе Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы театр факультетының быйылғы сығарылыш студенттары менән тағы ла бер онотолорға тейеш булмаған ваҡиғаға - сәйәси репрессиялар ҡорбандарына арналған "10 июль. Көн һәм быуат" тип аталған әҙәби-тарихи драма тәҡдим итте.**

**Башҡорт халҡы өсөн ысын мәғәнәһендә ҡанлы йәкшәмбе булған, әммә үкенескә күрә, бөгөн хәтерҙәребеҙҙән юйылған 1938 йылдың 10 июле, ошо көндә һәләк булған башҡорт зыялылары тураһында проект авторҙары - РФ һәм БР-ҙың халыҡ артисы, профессор Таңсулпан Даһи ҡыҙы БАБИЧЕВА һәм филология фәндәре кандидаты, доцент Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы САЛАМАТОВА менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# БЕР БЫУАТҠА ҠАНЛЫ

**▸ Илебеҙҙең үткәнендә иҡтисади һәм мәҙәни өлкәләге еңеүҙәр генә түгел, күп ҡорбандар талап иткән хаталар булғанын да беләбеҙ. XX быуаттың иң ҡырағай ҡылығына - сәйәси ҡорбандар темаһына мөрәжәғәт итергә нимә этәрҙе?**

**Т. БАБИЧЕВА:** Минең быуын Советтар Союзы осорон бик яҡты заман итеп хәтерләй. Ысынлап та, беҙ үҫкән, уҡыған, эшләй башлаған осорҙа ихтилалдар, репрессиялар, һуғыш ваҡыттары үткәйне, уртаҡ идея менән матур итеп йәшәнек, хеҙмәт иттек. Шул уҡ репрессия ҡорбандары тураһында тарих китаптарынан уҡып ҡына белә инек, әммә тарихты ла кешеләр яҙа, уның ҡайһы бер биттәренең бөтөнләй дөрөҫ булмағанлығын һуңғараҡ аңланыҡ. Ғөмүмән, үҙгәртеп ҡороу йылдарынан һуң күп нәмә асылды, "Огонек" журналында баҫылған мәҡәләләрҙе уҡып, сәстәр үрә торор ине.

Был тема үҙенән-үҙе килеп сыҡты, тиһәк тә була. Уның башланғысы 2007 йылға барып тоташа, ул йылда эстрада төркөмө менән Шәйехзада Бабич тураһында спектакль эшләгәйнек. Уны Башҡорт дәүләт филармонияһында, Йылайырҙа шағирҙың һөйәктәрен ерләү ваҡытында, тыуған ауылы - Дүртөйлө районы Әсән ауылында күрһәттек. Телевидениеға яҙҙырып, зәңгәр экрандарҙа ла күрһәтелде ул. Һуңғы ваҡытта ҡабатлап күрһәткәндәре юҡ, әммә беҙ Мәғариф министрлығы ярҙамында уны тиражлап, мәктәптәргә ҡулланма итеп ебәрә алдыҡ. Беренсе тәжрибәнән һуң, Бабич темаһын тағы дауам итергә теләк уянды, мине шағир тормошоноң Ырымбур осоро бигерәк ҡыҙыҡһындыра ине. Ошо уйҙар менән йөрөгәндә, Гөлсәсәк Дәүләтбай ҡыҙы сәйәси ҡорбандар темаһын күтәрергә тәҡдим итте.

**Г.САЛАМАТОВА:** Миләүшә Иҙрисованың Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ижады һәм тормошона арналған хеҙмәтен уҡығанда ни эшләптер был шәхестең үлем датаһына иғтибар иттем. 1938 йылдың 10 июле беренсе халыҡ йырсыһын ғына түгел, башҡа шәхестәребеҙҙе лә юҡҡа сығарыуын белгәнлектән, хәтеремә төшөрөп, уларҙы һанай башланым. Ошо рәүешле был датаға бәйле эҙләнеүҙәр башланды. Әлбиттә, сәхнә әҫәре эшләү өсөн тейешенсә тикшеренеүҙәр үткәрергә кәрәк ине. Репрессия ҡорбандарының күбеһенең фамилиялары, уларҙың ил өсөн башҡарған эштәре онотолоп бөткән, ләкин уларҙың исемени өсөндөр тарихта ҡалған бит. Ни өсөн һуң? Шулай итеп, студенттарға ял ваҡытына ошо һорауға яуап эҙләргә тигән өйгә эш биреп, үҙебеҙ ҙур эҙләнеүҙәр үткәреп, сәхнә әҫәре килтереп сығарҙыҡ. Был темаға арналған мәҡәләләр, хәтирәләр, был шәхестәрҙең яҙмышын һәм эшмәкәрлеген өйрәнгән белгестәрҙең китаптарын ярҙамға килде. Консультанттар менән эшләнек, БДУ-ның Бөрө филиалы доценты Гөлнур Ҡасҡынова, музыка белгесе Миләүшә Иҙрисова, шағир Рауил Бикбай, ғалим Бөрйән Байымовтың ғилми хеҙмәттәрен, яҙыусы Г. Ғиззәтуллинаның "Һәҙиә" романы, Ҡасим Аҙнабаев, Ролена менән Альберт Амантаевтарҙың хәтирәләрен, Рафаэль Амантаевтың шәхси архивын ҡулландыҡ. Башҡорт дәүләт академия драма театры музейы мөдире Азалия Балғазина ҙур ярҙам күрһәтте, сәнғәт академияһы музейынан шулай уҡ фотолар алдыҡ.

**Т. БАБИЧЕВА:** Милләтебеҙ тарихындағы был фажиғә гел урап үтелә торған тема булды. Ошо режим ҡорбаны, СССР-ҙың халыҡ артисы Зәйтүнә Бик-



булатова менән театрҙа күп йылдар бергә эшләнек, ул да бер ваҡытта ла көсөргәнешле ваҡиғалар булғанын, нимәләр кисергәнен асыҡ итеп һөйләмәй ине. Уларҙың ҡулға алынған ваҡыттарын ғына ишетеп беләм, ире Мәкәрим Мәһәҙиев алдараҡ ҡулға алына, ә Зәйтүнә Ислам ҡыҙын НКВД хеҙмәткәрҙәре пароход менән гастролдән ҡайтышлай көтөп тора. "Ярай әле, баланы биреп ебәрер өсөн апайыма шылтыратырға рөхсәт иттеләр", - тип һөйләгәйне Зәйтүнә Ислам ҡыҙы. Шунан һуң, Ғәзим Шафиҡовтың "Һәҙиә" спектаклендә Һәҙиә ролен уйнағанда был образ менән ҡыҙыҡһыныуға, шәхесен өйрәнергә тура килде. Ғәзим ағай менән яҡындан аралаша инек, уның был темаға арналған мәҡәләләре күп аныҡлыҡтар индерҙе.

Сәхнәгә публицистик жанрҙағы спектакль сығарырға булыр ине, әммә ул ҡоро мәғлүмәт кенә бирә. Халыҡтың күңеленә үтеп инһен өсөн шәхестәрҙең кеше булараҡ тарихы - ҡайҙа тыуыуы, кемгә ғашиҡ булыуы, ниндәй маҡсаттар менән янып йәшәүе, нимәләр эшләүе тураһында белергә кәрәк, тап шул саҡта ғына көслө драматургия әҫәре эшләргә мөмкин. Беҙҙең әҫәрҙә биш егет биш золом ҡорбаны булған шәхесте кәүҙәләндерҙе: Нәфис Сәйетов - Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙы, Зөлфир Басиров - Мәкәрим Мәһәҙиевты, Тимур Рамазанов - Ғәзиз Әлмөхәмәтовты, Илнур Сәлимгәрәев - Ғабдулла Амантаевты, Азат Ғәйнанов Ғөбәй Дәүләтшин ролдәрен башҡарҙы. Иң ҡыҙығы, улар тышҡы ҡиәфәттәре, бигерәк тә холоҡҡылыҡтары менән был шәхестәргә шул тиклем оҡшаған. Ҡыҙҙар инде уларҙың ҡатындары, балалары ролдәрен башҡарҙы. Зилиә Сафиуллина - Зәйтүнә Бикбулатованы, Лилиә Әҙелмурзина - Мәстүрә Әлмөхәмәтованы, Айһылыу Фәйезова - Әлмөхәмәтовтарҙың ҡыҙы Розаны, Зөлфиә Ишмурзина - Сәбиҳә Амантаеваны, Гүзәл Ғәлләмова - Амантаевтарҙың ҡыҙы Роленаны, Зөлмәрә Ғәбитова - Һәҙиә Дәүләтшинаны, Гүзәлиә Маликова - илсе Кәрим Хәкимовтың ҡатыны Хәҙисә Хәкимованы уйнаны.

**▸ Репрессия тураһында артыҡ мәғлүмәтле булмаған кеше өсөн әҫәрҙең ни өсөн 1938 йылдың 10-сы июленә бағышланыуы ла аңлашылмайҙыр, моғайын. Спектакль ни өсөн "10 июль. Көн һәм быуат" тип атала?**

**Г.САЛАМАТОВА:** Билдәле булыуынса, 1937 йылда СССР-ҙа Сталин репрессияларының иң ҡыҙған осоро була. Ни сәбәптәндер, автономиялы республикалар араһында "халыҡ дошмандары"н ҡулға алыуҙар иң тәүгеләрҙән булып Башҡортостанда тормошҡа ашырыла башлай. Башҡорт сәнғәте һәм әҙәбиәте өсөн ҡара көндәр килә. Февраль-март пленумының икенсе көнөнә уҡ республиканың Үҙәк статистика идаралығы етәксеһе Ғабдулла Ғисмәтуллин ҡулға алына. Унан һуң 3 июндә - Мөхтәр Байымов, 27 июлдә - Дауыт Юлтый, 16 августа - Афзал Таһиров, 30 августа - Ғөбәй Дәүләтшин, 5 сентябрҙә - Мәкәрим Мәһәҙиев, 21 октябрҙә - Вәлиулла Мортазин-Иманский, 4 ноябрҙә - "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Төхвәт Йәнәби, 11 декабрҙә - Ғәзиз Әлмөхәмәтов. 1938 йылдың 11 ғинуарында "халыҡ дошманы" ялаһы Башҡорт китап нәшриәте директоры Булат Ишемғоловҡа һәм БАССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе Ғаффан Нәзировҡа тағыла.

**Т. БАБИЧЕВА:** Был йылдарҙа законлар шул тиклем аяуһыҙ була, ул шәхестәрҙең үҙҙәрен генә түгел, ғаиләләрен ҡулға алыуҙар, балаларын төрлө яҡҡа таратыуҙар башлана. Ә 1938 йылдың 10 июле ул башҡорт халҡы өсөн ысын мәғәнәһендә ҡанлы йәкшәмбе була. Был көн календарҙа ысынлап та йәкшәмбе. Беҙҙең мәғлүмәттәр буйынса, тап ошо көндә башҡорт интеллигенцияһы тип иҫәпләнгән 43 кеше атып үлтерелә.

**Г.САЛАМАТОВА:** Башта беҙ 33 кеше тип уйлағайныҡ, шунан NEKROPOLE электрон энциклопедияһы сайтында ултырып, Башҡортостандан булғандарҙы барлап, 10 июлдә атылған 43 кешене таптыҡ. Әммә уның һуңғы һан булмауы бик ихтимал, шуға кәмендә 43 кеше, тип әйтәбеҙ. Был сайттан тыш, һәр бер исем-фамилияны биләгән вазифаларына ҡарап, башҡа документтарҙан, башҡа сайттарҙан, энциклопедияларҙан сағыштырып ҡараныҡ. Эҙләнеүҙәр мәлендә яңы мәғлүмәттәргә лә юлығырға тура килде, мәҫәлән, быға тиклем был көндә өс халыҡ мәғарифы комиссары атылған, тип белә инек. Әммә улар дүртәү була - Фәтхи Әхмәҙуллин (1921 йыл), Әхмәт Иҫәнсурин (1930 йыл), Риза Әбүбәкиров (1930-1935 йылдар), Ғөбәй Дәүләтшин (1935-1937 йылдар). Бындай кешеләрҙең бер көндә үлтерелеүе - ул ваҡыттағы башҡорт йәмғәтселеге трагедияһы.

Ғабдулла Амантаевтың архивы мираҫ буйынса ейәне, БР-ҙың халыҡ артисы Рафаэль Амантаевта. Билдәле булыуынса, унда ошондай һан бар - 10. 07, 00.20. Тимәк, 1938 йылдың 10 июле тыуа һәм 20 минуттан Ғабдулла Амантаевты атырға алып сығалар. Спектаклдә был турала әйтелә. "Башҡорт обкомының бүлек мөдире Риза Әбүбәкировты алып киттеләр. Ғабдулла Амантаевты сығарҙылар, һуңынан Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа сират етте. 43 кешенән торған камера яртылаш бушап ҡалды. "Бөгөнгө допрос алфавит тәртибенә ҡоролған, хәйерлегә булһын", - тине арабыҙҙа иң зирәге Вәлиулла ағай шомланып". Беҙ үҙебеҙсә, был ҡан ҡойоштоң алфавит тәртибендә булыуын фаразлайбыҙ.

**Т. БАБИЧЕВА:** "10 июль башҡорт халҡының мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, рухына балта сабылды", - тиелә спектаклдә. Был ысынлап та шулай була. Әгәр ул шәхестәр иҫән булһа, ҡартайғансы халыҡҡа хеҙмәт итә алһалар, ниндәй бөйөк эштәр башҡарылыр ине. Уларҙың уҡыусылары тағы күпме изгелек эшләр ине милләтебеҙгә. Был бит иҫ китмәле фажиғә! Беҙ был турала белергә, йәштәргә аңлатырға тейеш. Был көн башҡорт халҡында хәтер һәм ҡәҙер көнө булырға хаҡлы.

**Г.САЛАМАТОВА:** Ҡорбан булған шәхестәрҙең иҫтәлегенә һәйкәл ҡуйылырға тейеш. Әгәр ҙә бөгөнгө быуын оло шәхестәр алдында баш эйергә һәм уларҙың хәтерен ҡәҙерләргә әҙер икән, тимәк, йәшәү дауам итә. Сөнки лайыҡлы киләсәкте үткәндәргә ихтирам менән ҡараған йәш шәхестәр генә яҙа ала. Беҙ һәр студентты шәхес итеп ҡарайбыҙ, әммә был спектаклдә уйнағандан һуң, студенттарыбыҙ тағы ла бер башҡа үҫеп киткәндәй булды. Шәхестең бәләкәй яҙмышы менән йәшәр өсөн үҙендә шәхеслек тойғолары тойоп, шәхеслек бурыстары кисерергә тейешһең - беҙҙең студенттарыбыҙ был бурысты лайыҡлы башҡара алды.

**Т. БАБИЧЕВА:** Композицияны оҙаҡҡа һуҙыу мөмкин түгел, сөнки сәхнәнең үҙ законлары бар. Унан һуң, былай ҙа мәғлүмәт күп булды, кеше йөрәге күпте һыйҙыра алмай. Әммә был теманың киләсәктә бер нисә серияһы булыуы ихтимал.

**▸ Был шәхестәр ҙә, уларҙы язалаусылар ҙа - барыһы ла бер үк система ҡорбандары, хәҙер ғәйепләләрҙе эҙләү урынһыҙҙыр ҙа, моғайын. Шулай булғас, "10 июль. Көн һәм**

*"10 июль башҡорт халҡының мәҙәниәтенә, сәнғәтенә, рухына балта сабылды", - тиелә спектаклдә. Был ысынлап та шулай була. Әгәр ул шәхестәр иҫән булһа, ҡартайғансы халыҡҡа хеҙмәт итә алһалар, ниндәй бөйөк эштәр башҡарылыр ине. Уларҙың уҡыусылары тағы күпме изгелек эшләр ине милләтебеҙгә. Был бит иҫ китмәле фажиғә! Беҙ был турала белергә, йәштәргә аңлатырға тейеш. Был көн башҡорт халҡында хәтер һәм ҡәҙер көнө булырға хаҡлы.*

***✓ Спектаклдә был турала Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ҡатыны Мәстүрә былай тип әйтә: "Мин Ғәзиздән үҙ халҡыңа хеҙмәт итеү тигән бөйөк төшөнсәгә өйрәндем".***

# ТОРОШ...

## бер көн

**быуат"тың маҡсаты һәм әһәмиәте нимәлә?**

**Т. БАБИЧЕВА:** Спектакль өҫтөндә эшләгәндә беҙ фашлау юлынан барманыҡ. Ниндәйҙер хөкөм сығарып, быныһы - һәйбәт, быныһы - насар, тип тә әйтмәнек. Беҙгә бары тик дәүерҙең ошо тиклем ҡапма-ҡаршылыҡлы булыуын күрһәтеү мөһим ине.

**Г.САЛАМАТОВА:** Ҡысҡырып әйтә торған ниндәйҙер ғәйепләүҙәргә, хатта ваҡ ғәйепләүҙәргә ҡоролмаған ул спектакль. Мәҫәлән, Ғабдулла Амантаев тураһында әйткәндә, 30 йәштә диссертация яҙған, 4 балаға атай булған, Тел һәм әҙәбиәт буйынса ғилми-тикшеренеү институты менән идара иткән. Уның тормошо үҙе бер сценарий яҙырлыҡ. Ҡулға алынғас, уның ҡатыны 4 бала менән урамда тороп ҡала.

Тормош, йәшәү бер ваҡытта ла еңел булмаған, әммә заманалар ниндәй генә булмаһын, халҡыңды гел яратырға кәрәк. Спектаклдә был турала Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ҡатыны Мәстүрә былай тип әйтә: "Мин Ғәзиздән үҙ халҡыңа хеҙмәт итеү тигән бөйөк төшөнсәгә өйрәндем". Үҙ халҡыңа хеҙмәт итергә өйрәтеү - спектаклдең төп маҡсаттарының береһе.

**Т. БАБИЧЕВА:** Ни тиклем дәрәжәлә аҡыллы, интеллигент һәм белемле кешеләр була улар. Шул уҡ Ғабдулла Амантаевты алғанда, Санкт-Петербургта аспирантура тамамлаған, Александр Самойловичтар менән күрешеп-белешеп, диссертациялар әҙерләп, яҡлап йөрөгән - улар ысынлап та иҫ китмәле шәхестәр. Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа ла шулай уҡ йырсы һәм композитор булараҡ ҡына ҡарау аҙ. Ул музыка эшмәкәре, уның документтары араһында иҫке төркисә графика менән яҙылған йыр тураһындағы мәҡәләләре байтаҡ. Башҡорт профессиональ музыкаһына нигеҙ һалыусы, һәләтле йәштәрҙе йыйып, Мәскәүгә ебәреп, белем алырға ярҙам итеүсе. Йырсылар араһынан беренселәрҙән булып БАССР-ҙың халыҡ артисы исеменә лайыҡ булыусы. Ете ай төрмәлә саҡта ла ул "Урал", "Буранбай", "Сибай" йырҙарын йырлап, тотҡондарҙың рухын күтәрә. Үлер алдынан да йырлай ул халыҡ йырын. Спектаклдә матур бер сәхнә бар ине, уны ваҡыт сикле булыу арҡаһында, алып ташларға тура килде. Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ҡыҙы Роза Әлмөхәмәтова: "Атай, Республика музыка гимназия-интернатына һинең исемеңде бирҙеләр. Мин ейәндәрең менән һиңә бюст асыу тантанаһында ҡатнаштым, халыҡ таралғас, таш һыныңды ҡосаҡлап иланым. Таш һының ҡайтты, ғәзиз һөйәктәрең ҡайҙа?" - тип өндәшә. Был һүҙҙәр менән Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың исеме тағы ла юғарыраҡ сәнғәт учреждениеларына ҡушылырға хаҡлы икәнен әйтергә теләгәйнек. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры уның исемен йөрөтһә, бик лайыҡлы булыр ине.

Вәлиулла Мортазин-Иманский һуң! Ул1919 йылда Стәрлетамаҡта буш урында башҡорт театры төҙөүсе. Мейәс, Златоуст, Өфөнән профессиональ артистарҙы йыйып, спектаклдәр ҡуя башлайҙар. 1924 йылда инде театрҙы Өфөгә күсереп, күсмә театр төҙөп, 1930 йылда Мәскәүгә - мәҙәниәт олимпиадаһына сығыш яһарға баралар. Мортазин-Иманскийға партия съезында һүҙ бирелә, ул унда башҡорт театры ниндәй булырға тейешлеге тураһында сығыш яһай. РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы, Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы була. Был заман уларҙың күкрәктәренә миҙалдар ҡаҙай ҡаҙауға, тик был ҙурлауҙар бер көн килеп юҡҡа сыға. Иң аяныслыһы, ҡулға алынғас, театрҙа Мәкәрим Мәһәҙиев менән икеһенә суд була, бына шунда инде уларға үҙ коллегалары ла төрлө ваҡ ғәйепләү ташлай - кемгәлер ситса биреп еткермәгәндәр, кемгәләр халыҡ дошмандарының әҫәрҙәренән көсләп ролдәр биргәндәр - был үҙе үк үлемгә тиң була.

**Г.САЛАМАТОВА:** Спектаклдә: "Беҙ фекерҙәш тип йөрөгән кешеләр бөтөнләй икенсе төрлө уйлай булып сыҡты", - тип һөйләшәләр Мәкәрим Мәһәҙиев менән Мортазин-Иманский аҙаҡтан. Уларҙы театрҙа булған ошо судтар рухи яҡтан үлтерә, шуға ла улар үлемдән ҡурҡмай. Ә Мортазин-Иманский 1937 йылдың 27 сентябрендә Мәскәүҙә атып үлтерелгән "халыҡ дошманы" Муса Мортазин менән туғанлыҡта ғәйепләнә. Ҡулға алынған төндә ул ғәйеп тағыу өсөн сәбәп булып фамилияһы торғанын аңламай ҙа.

"Һәтес, һәтес, һәтес тә, бигерәк матур бәпес тә" - беҙ был һамаҡты халыҡ фольклорынан тигән булабыҙ, әммә уны Ғабдулла Амантаев яҙғанлығын белмәйбеҙ. Амантаев мәктәп программаһына сәйәси ҡорбан булараҡ ҡына ингән. Ә бит иҫ китмәле шиғырҙары бар уның, башҡорт әҙәбиәтендә Амантаевтың лайыҡлы урыны булырға тейеш.

**Т. БАБИЧЕВА:** Диплом спектакле генә булыуға ҡарамаҫтан, битараф ҡалған кеше булманы был сәхнә әҫәренә. Хатта телде белмәгәндәр ҙә, һәр нәмәне аңлап ултырҙым, тинеләр аҙаҡтан. Тел генә түгел, йөрәк ялҡыны һәм фекер көсө әҫәрҙе һәр милләт кешеһенә аңлайышлы итте. "Документалистика художестволы әҫәр кимәленә күтәрелә алған", - тигән юғары баһа биреп, жанрын "реквием" тип атарға кәңәш итте коллегаларыбыҙ. Сөнки ул - был тормоштан ғәҙелһеҙ киткән ҡорбандар өсөн зар йыры. Иң затлы, иң ҡәҙерле шәхестәребеҙ, улар әле булһа батырлығы менән йәштәргә көс, рух биреп тора.

**Г.САЛАМАТОВА:** Был әйбергә тотонған ваҡытта шул тиклем ҡурҡтыҡ, берҙән, үҙебеҙ атҡара алырбыҙмы, икенсенән, студенттарға аңлата алырбыҙмы? Хаталар ебәреү ярамай торған эш ине. Йыйылған мәғлүмәттәр араһында сәхнәгә сыҡмағандары күп булды, әллә күпме шәхестәр телгә алынманы. Үҙ арбаңдан үҙ балаңды үгәйһетеп ҡыуып төшөрөп ҡалдырған кеүек булды. Дауыт Юлтыйҙың, Ғимат Йәһүҙиндың, Мөхтәр Байымовтың һәм башҡаларҙың яҙмышы шулай уҡ сәхнәгә сығырға лайыҡлы. Студенттар менән күп уҡыныҡ, һәр береһенең яҙмышы менән йәшәргә тырыштыҡ.

Ниндәйҙер ваҡиға тыуҙырыу өсөн ваҡыт менән урындың тура килеүе шарт. Был спектакль тап ошо студенттар тарафынан сығарылырға тейеш булған ул. Быйыл был ҡанлы ваҡиғаға - 75 йыл. Спектаклде бер нисә тапҡыр уйнаныҡ, уны Өфө сәнғәт академияһы сәхнәһендә 13 июндә аҙаҡҡы көн уйнауыбыҙ шулай уҡ иҫтәлекле көнгә - Башҡортостан өлкә комитетының икенсе секретары Әхмәт Иҫәнсуриндың тыуған көнөнә тура килде. Иҫәнсурин Вәлиулла Мортазин-Иманский менән ауылдаштар, Ырымбур губернаһының Имәнғол ауылы кешеләре. "Әгәр ҙә театр асырға насип булһа, һин уны тыуған яҡта, үҙебеҙҙең Ырымбурҙа ас. Ырымбур - боронғо башҡорт ере, унда башҡорт театры булырға тейеш", - ти Иҫәнсурин Мортазин-Иманскийға. Ул үҙенең үлерен белә, ни эшләптер, Мортазин-Иманский тере ҡалыр, тип уйлай, ахыры.

Беҙ һәр эшебеҙ өсөн үҙебеҙ яуап тотабыҙ, яҡшы эштәребеҙ өсөн дә, белеп-белмәй ҡылған гонаһтарыбыҙ өсөн дә. Бына шуның өсөн дә спектаклдә ғәйепләүҙәр юҡ. Ирҙәре ҡулға алынғас, сират ҡатындарына етә. Өлкә комитеттың беренсе секретары Яков Быкиндың ҡатыны Софья Крушанская ҡулға алынған саҡта ауырлы була, йәлләмәйенсә, ауырлы ҡатынды атып үлтерәләр. Ҡатын-ҡыҙға һәм бына-бына әсә булырға торған кешегә ҡул күтәргән быуат та үҙенең ҡылыҡтары өсөн үҙе яуап бирәсәк. Шулай ҙа 1937 йылдың иң ҙур трагедияһы - балалар яҙмышына төшкән һынауҙар. Бер туған Амантаевтар 17 йылдан һуң ғына осрашалар. Әгәр ҙә был осрашыу булмаһа, Сергей менән Олег Ломакиндар башҡорттоң бөйөк улы Ғабдулла Амантаевтың ейәндәре булыуҙарын белмәй үҫерҙәр ине. Башҡортостандың халыҡ артисы Мәкәрим Мәһәҙиевтың улы Лир үҙ атаһының фамилияһын йөрөтөүҙән мәхрүм ителә.

**Т. БАБИЧЕВА:** Һәр илдең, һәр халыҡтың тарихын ҡараһаң, бындай вәхшилектәр ҡабатланып тора. Хәҙер инде ундай золомдар булмаясаҡ, тип тынысланырға ярамай. Был теманы күтәреп, уны кешеләр өсөн иҫкәртеү итеп тә яңғыратҡы килә. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөнгө йәштәр шул тиклем битараф, тормош беҙҙән генә башлана, тигән ышаныстары, минминлелек көслө. Беҙҙең бурыс - тарихтағы ошо ваҡиғаны иҫкә төшөрөп, үткәндәргә генә түгел, бер-берегеҙгә битараф булмағыҙ, бындай вәхшилектәргә ҡабатланырға юл ҡуймағыҙ, тип иҫкәртеү. Сөнки, тарих - ул үткәндәр хаҡында яҙыу түгел, тарих киләсәк өсөн яҙыла.



**Г.САЛАМАТОВА:** Башҡорт халҡы өсөн был йәкшәмбе, илгә билдәле ҡанлы йәкшәмбенән, бәлки, ҡанлыраҡтыр. Тап ошо көндө БАССР-ҙың беренсе халыҡ йырсыһы, композитор, профессиональ музыка сәнғәтенә нигеҙ һалыусы Ғәзиз Әлмөхәмәтовты, беренсе милли башҡорт театры төҙөгән Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙы, башҡорт профессиональ театрына нигеҙ һалыусы Мәкәрим Мәһәҙиевты, Башҡорт филологияһына нигеҙ һалыусы, Тел һәм әҙәбиәт буйынса ғилми-тикшеренеү институты директоры Ғабдулла Амантаевты, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы, БАССР-ҙың халыҡ мәғарифы комиссары Ғөбәй Дәүләтшинды, яҙыусы, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Төхфәт Йәнәбиҙе, яҙыусы, Башҡортостан дәүләт нәшриәте директоры Булат Ишемғолдо, яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусы Дауыт Юлтыйҙы, көнсығыш телдәре буйынса белгес, тәржемәсе, журналист, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Мөхтәр Байымовты, БАССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе Ғаффан Нәзировты, 1919-1920 йылдарҙа БАССР-ҙың Эске эштәр буйынса Халыҡ Комиссары булып эшләгән, һуңынан Ер һәм малсылыҡ буйынса ғилми-тикшеренеү институты директоры Фәтих Төхвәтуллинды, Башҡортостан өлкә комитетының икенсе секретары Әхмәт Иҫәнсуринды, комитеттың бүлек мөдире Риза Әбүбәкировты, алты китап авторы, нефтсе, БАССР-ҙың Сәнәғәт буйынса Халыҡ Комиссары Ғимад Йәһүҙинды, Дәүләт планы комитетының БАССР-ҙағы рәйес урынбаҫары Фәтхи Әхмәҙуллинды, БАССР-ҙың Халыҡ иҫәбен алыу хеҙмәте етәксеһе Ғабдулла Ғисмәтуллинды, БАССР-ҙың Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Зиннәтулла Булышевты, Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты директоры Шәмси Абзановты, Башҡортостан өлкә комитетының бүлек мөдире Моталлап Камиловты, инструкторы Хәниф Әбүнәғимовты, Инженер-техник хеҙмәткәрҙәрҙең квалификацияһын күтәреү институты директоры Шәхвәли Ибраһимовты һәм башҡаларҙы юғалта башҡорт халҡы. Араларында бер агроном һәм бер мәктәп директоры була, ҡалғандары барыһы ла рәсми вазифалы кешеләр.

***Беҙ һәр эшебеҙ өсөн үҙебеҙ яуап тотабыҙ, яҡшы эштәребеҙ өсөн дә, белеп-белмәй ҡылған гонаһтарыбыҙ өсөн дә. Бына шуның өсөн дә спектаклдә ғәйепләүҙәр юҡ. Ирҙәре ҡулға алынғас, сират ҡатындарына етә. Өлкә комитеттың беренсе секретары Яков Быкиндың ҡатыны Софья Крушанская ҡулға алынған саҡта ауырлы була, йәлләмәйенсә, ауырлы ҡатынды атып үлтерәләр. Ҡатын-ҡыҙға һәм бына-бына әсә булырға торған кешегә ҡул күтәргән быуат та үҙенең ҡылыҡтары өсөн үҙе яуап бирәсәк. Шулай ҙа 1937 йылдың иң ҙур трагедияһы - балалар яҙмышына төшкән һынауҙар. Бер туған Амантаевтар 17 йылдан һуң ғына осрашалар.***

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был спектаклде ҡарағандан һуң бөтөн тормошо - үҙе бер батырлыҡ өлгөһө булған был шәхестәр иле, халҡы, теле өсөн көйгән һәр кешенең йөрәгендә йәшәй башлауына иманыбыҙ камил. Һәр ерҙә беренсе булған был кешеләрҙең ҡыҫҡа ғына ғүмерҙәре эсендә башҡарған эштәрен дә, исемдәрен дә онотторға хаҡыбыҙ юҡ беҙҙең. "10 июль. Көн һәм быуат" спектакле - был йүнәлештә эшләнгән беренсе аҙым ғына. Йәш артистарҙың: "Сәхнәгә сығарырға батырсылыҡ иткән был драмабыҙ был шәхестәргә ҡәҙер һәм хөрмәт йөҙөнән атҡарылды. Йәнә шуға инанабыҙ: 10 июль республика өсөн Ҡәҙер һәм хәтер көнө булыр. Ҡорбан булған шәхестәргә һәйкәл ҡуйылыр. Батырлыҡ һәм тоғролоҡ, ҡәҙер һәм хәтер һәйкәле..." - тигән һүҙҙәренә башҡорт йәмәғәтселеге үҙенең яуап һүҙен әйтергә тейештер, моғайын.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**
**әңгәмәләште.**

***✓ Ә бик борон, эйе, бик борон ғашиҡтар Ҡолонташ эргәһенә барып, мөхәббәттәренә тоғро булырға вәғәҙә бирешкән; тәндәре менән ҡушылғандары ла осраған. Әлбиттә, туйҙан һуң, үҙҙәренә оҡшаған урман ышығында…***



**Сабир ШӘРИПОВ**

# КОЛОНТАШ

**(Повестан өҙөк)**

Көндәр һаман аяҙ, һаман эҫергәнес. Кискә табан ғына әлһерәгән тәбиғәткә, гүйә, саҡ-саҡ йән керә: ҡырсын түшәлгән саңлы юл ситендә турғайҙар, сәүкәләр сәпсенә, ҡайҙалыр көтөүҙән айырылып ҡалған һыйыр баҡырып ебәргеләй. Урман яҡын, ара-тирә иҫкән елдәргә ҡайын суҡтары сайҡалып ҡуя, ә уҫаҡтар айырата һиҙгер: меңмең былтыҡ япраҡтары "һә" тигәнсе эркет төҫөндәге эске яғына әйләнә, шунан барсаһы бер юлы шыйыҡ йәшел тыштарын тонйорап батҡан ҡояшҡа бора һала.

Урман ауыҙында ҡапыл көрмәкләшеү ҡупты: бәй-бәй, битен штормовкаһы башлығына йәшергән әзмәүер нәҙекәйбил ҡыҙҙы аймарға маташа лаһа! "Ҡотҡарығыҙ! А-а!.. Әлә-әсе-ей! Мирза ағы-ый!" Шикле әҙәм ауыҙын томаларға иткәс, ҡороған ағас ботағы эләктереп, Алмагөл үҙе һөжүмгә күсте. "Яҡын килмә, дошман! Мейеңде сәсрәтә һуғам!" Әммә киҙәнгән ыңғай абынды ла ҡоланы. Сос икән, ятҡан еренән осло үксәләре менән ҡушаяҡлап тороп тубығын кинәт эткәйне, теге бәндә артына лап тәкмәсмәһенме! Етмәһә, һимеҙәк осаһына тос ҡына типте лә, Алмагөл ахвах бирегә йүгерҙе. Бер аҙҙан өс юл сатына етте, уртала һерәйгән иҫкәртеү бағанаһын ҡосто, шунан йәнәштәге ҡыуаҡ төбөнә сүгәләне, аһылдауын баҫып, тыңларға, ҡаранырға кереште. Ҡайҙа яуыз мөртәт? Баҫтырмаҫмы үҙен? Уф, ҡотолдо, шикелле...

Ат бышҡырыуын, тояҡ шыңҡырҙауын ишеткәс, ларҫ-ларҫ типкән йөрәк тапҡырын ышҡып, йәшел сирәмгә ҡапланғайны, ҡолағына йыр салынды:

*Кил ҡаршыма, тыуған ауылым,*
*Аунап үҫкән тауғынам…*

- Фәрит түгелме? Фә-ри-ит! - Алмагөл тиҙ генә ҡағынғас, уңға ырғылып, аҡландан юғалғайны, моң көсәйә барҙы, ә тәгәрмәс тауыштары тоноҡланды.

Инде боҫҡан ҡыуаҡ сатыранан сығып, Алмагөл һөйөнөслө сарбайлап ҡаршы йүгерҙе. Аптыраны Фәрит, аңшайҙы, улай ҙа артыҡ ҡаушаманы.

Бер аҙҙан йәштәр аҡланға етәкләшеп инделәр. Квартал бағанаһы төбөнөрәк туҡталғайнылар, эргәләренән генә ҡыйҡылдап төн ябалағы осоп уҙҙы.

- Һин ҡалтырайһыңмы ул, Алмас? Мә, ябын әле минең сәкмәнде.

- Ҡалтырау түгел, аҡылыңдан яҙырһың. - Егет йоҡа курткаһын иңенә һалғас, ҡыҙ мышҡылдап бер ултырҙы, бер торҙо. - Мирза ағайымдың ҡыуышы яғына йүгерәм тип, алйып-сәсәп, бынауында килеп тәгәрәсе, ыжый Аллаҡайым...

- Ни булды һуң? Асыҡлап ҡына һөйлә әле.

- Клубты бикләп, иң аҙаҡ яңғыҙ ғына сыҡтым ҡайтырға... Өйөгөҙҙә ут булғас, һин ҡайтаһыңдыр, йә үткәндәге һымаҡ, осратмаммы үҙеңде, тип һуҡмаҡтан атланым. Юл быуып, йәбеште бер әзмәүер...

- Йәбештеме, әллә маташты ғынамы? - Фәрит сабырһыҙланып һорағайны, Алмагөл үҙенә аптыраулы төбәлде. - Нисек... маташты?

- Үҙең әйтәһең дәһә.

- Улай түгел! Һин уйлағанса йәбешеүе лә мөмкин ине. Абау! - Йөҙөн ҡаплап, ҡыҙ йәнә буҙлап ебәрҙе. - Арбаһына арҡыры бәйләп, алып ҡасыр ине - Хоҙай араланы... дә-әү өрәктән.

- Сырамытманыңмы һуң?

- Юҡ инде, юҡ! Ай ҡалҡмағайны, ҡараңғы ине урман эргәһе.

- Тауышын да абайланыңмы? - Фәрит быны тирә-йүнде байҡап төпсөндө.

- Ух аҫтыртын, ләм-мим өндәшмәне... - Алмагөлдөң тауышы тигеҙләнде. - Ҡырынмаған да, ишшеү йылмайып маташа!

- Үҙен танытмаҫ өсөн өндәшмәгән. Бәлки, ялланмыш әҙәмдер?

- Нисек? Яллан... Ҡалай һорау артынан һорау сәпәйһең? рәләр тиме... - Алмагөл башын ҡырынайтып, бағанаға баҡты. - Арендаға - 49 йылға - Ҡолоҡай үрендәге тапалмаған тау-урманды алмаҡсы бер замана байы. Ә ниңә 39 йә 59 йылға түгел? Утыҙ туғыҙлы әҙәмдәр сығарамы был законды?

Фәрит, һорауҙы ишетмәгәндәй, иҫкәртеүҙе уҡый:

- "Еләк-бәшмәк йыйырға..."

Алмагөл уҫал ғына ялғай:

- Ярамай! Һунар итеү, балыҡҡа йөрөү...

Фәрит өҫтәй:

- Ҡәтғи тыйыла! Бәшмәк, еләк йыйыу ҙа... һуғылыр ҙа, мине оҙатып ҡуйыр, тип өмөтләндем, уй, һапата...

- Ни арба, ни машина осраманы шул. Поселокта мобилка тота, беҙҙә тотмай. - Егет сумкаһын яурынына элде. - Ярай, иплэп кенә һөйләшәйек.

- Һөйләшерһең иплэп... - Алмагөл бер урында сөйөрөлдө. - Ниңәлер өшәнес...

- Ҡайтайыҡ һуң. Ана, томан быулана туғайҙа.

- Йөрәгем һаман дулаған һымаҡ. Әйҙә, һайрап ебәр хәбәрҙәреңде.

Фәрит, еңелсә ҡылансыҡланып, түшен ҡаға-ҡаға телдәрләнде:

- Әйтәйек, мин - яратам, һин - яратмайһың, ти. Ләкин нисек тә үҙемдеке иткем килә. Мин берәйһен яллайым һине урларға...

- Һинме? Уф, бер рәхәтләнеп көләйем тиһәм, көлгөм килмәйсе. Ашыҡ, юғиһә, Алмагөл бәпкәм, димсеrange теңкә ҡорой, ти бит өләсәйем. - Ҡыҙ, ары-бире тапанып, иләҫ-миләҫ шаярыуға күсте. - Урланып кейәүгә сығыуҙың романтикаһы барҙыр! Йыбытҡы булмайҙыр ул ҡыҙ урлаған егеттәр.

- Ярай, ситкә борма әле. Кейем-фәләнен күргәнең юҡ инеме?

Алмагөл йәһәт кенә тороп баҫты ла, куртка башлығын бөркәнеп, алпан-толпан атлап күрһәтте.

- Танып ҡара! Өләсәйем әйтмешләй, ғәйепһеҙ кешегә бәлә япһарыу - оло гонаһ.

- Милицияға хәбәр итәйек, әйҙә, лесничествоға инеп шылтыратайыҡ.

Тәүҙә ҡыҙ риза һымаҡ та ине, тик ҡапыл һүрелде.

- Ҡуй ҙа, ләститкә батып... Берҙе биш итеп... ғүмер буйы сәйнәрҙәр.

- Күп енәйәт ана шулай өндәшмәүҙән фашланмай ҡалалыр... - Башын аймап, һөйгәне ҡабат ергә ләм-мимһеҙ ултырғас, Фәрит сумкаһын ергә ҡуйҙы, уйсанланды. - Ун өс саҡрым пешком-турат тәпәйләнем. Эй, ауыл! Бигерәк төпкөлдә шул. Кеҫә телефоны ла тотмай бит... Ҡайтһаң, китеүҙәре ҡыйын, китһәң - ҡайтыуҙары... Йә, бер генә еңел машина уҙып китте, уныһына ла ун кеше ҡыҫылышҡайны.

- Уның ҡарауы, тәбиғәт шәп беҙҙә! - тине Алмагөл йөрәкһеп. - Үҙе ҡырыҫ, үҙе йәмле!

- Цивилизация кешелекте үлтерә, тиҙәрме... - Егет быны етди әйтте. - Асфальт һалһындар әле - саңдауға әйләнәсәк йәнтөйәгебеҙ!

- Олотау ҡурсаулығынан икеөс ауылды тырым-тыраҡай күсе-

- Бесән сапҡан, мал көткән, усаҡ яҡҡан өсөн - штраф! Мең һум!

- Һи-и: хаҡтар арта, штрафы ла йылдан-йыл мулыраҡ сәпәлер, - Алмагөл шулай тигәс, Фәрит күңелен өйкәгән һорау буйынса төпсөндө. - Бая һин, теге юлбаҫар ҡабат яҡын да юламаҫ, тинеңме әле?

- Кәнишне-е! Ышанмайһыңмы? Йә, бирерәк атла. - Фәрит эргәһенә яҡынлашҡайны, Алмагөл уның ике ҡулын тотоп, аяҡ салып, йәтеш кенә ҡолатты ла ҡуйҙы. - Баянан бирле сәмгә тейә инең...

- Аһ-һ! Аһ! Стәрлелә бейергә генә өйрәтмәгәндәр ҙәһә үҙеңде!

- Бүлмәләш әхирәтем самбо алымдарын өйрәтте. Өрәктең осаһына биреп тайҙым әле мин. Ә һине... йәлләп кенә аунаттым.

- Миңә уны, зинһар, телдән генә аңлат, - Фәрит ҡағына-ҡағына ерҙән ҡалҡынды. - Берүк күрһәтеп ҡуйма, йәме. Тауыҡ көләр йә ни...

- Юҡ, юҡ, оялам.

- Аңлашылды, ну-у Алмас-Алмаҡай!

- Яҙғандар төнәгөн гәзиттә: "Алмас" монгол телендә албаҫты икән.

- Шулайҙыр... Тик һин - һөйкөмлө албаҫты!

Егет ҡабат өндәшмәне. Ҡыҙ ҙа бер килке тынып торҙо, шунан ҡапыл теремекләнде.

- Поселокта Алмабикә исемле апай йәшәй, беләһеңдер. Шуның ире эсеп алдыниһә, Алмаҡайым, Алмасҡайым, яратҡан хәләлбикәм, тип ләпелдәп тора ла, сығып кит өйҙән, бәғерем-иркәм, тип ажғыра, имеш. Эй, албаҫты инде мин бөгөн, ямаҡай албаҫты. Яңыраҡ төшөмдә оҙон һарғылт бау күргәйнем - ауыл ситендә һинең менән осрашырға яҙған. Кәкерсәк һуҡмаҡта... Һине сәғәт ун икегә тиклем көтөп ултырған мин иҫәүән. Анау яҙғы кистәге һымаҡ: өйөнә лә инмәй, клубҡа

- Алдығыҙҙа, хөрмәтле Алмагөл туташ, Олотау ҡурсаулығының урмансылыҡ белгесе Фәрит Юламанов. Урал университеты дипломы - кеҫәһендә, министрлыҡтан юлланмаһы ла бар. Ай эсендә штатҡа алырға тейештәр.

- Ҡотлайым! Тик... Ҡурсаулыҡ ҙур, тотош Өфөнө күсерһәң дә, таман ғына һыйыр. Эҙләп тап инде ҡарурманда Фәлән Фәләновичты. Ау, ау, кемегеҙ Фәрит, тип?

- Олотау ҙа хәтәр ҙур, күпте күргән... Практика үткәндә Себер тауҙарын күрелде, тайганы гиҙелде. Ә башҡорт тайгаһы - кәнде беҙҙә! - Фәрит офоҡҡа ҡул иҙәп ҡуйҙы. - Бороноraҡ ҡартҡоро:

*Олотау ҙа тауын һатҡандарға*
*Әхирәттә ҡаты һорау бар, -*

тип юҡҡа ғына һамаҡламағандыр.

- Ыштанһыҙ башҡорт! Тауҙың тауын һатып ашамаһа!

- Урындағы түрә-ҡара һатҡан, юҡ ҡына аҡсаға, сәй-шәкәргә алданып. Бынан ике йөҙ йыл элегерәк. Халыҡ тауыш күтәреп ҡараған да бит, карателдәр килә һалып еткән.

- Әле Ҡолонташ битләүҙәрен "яңы байҙар"ға һатыу-һатмау тураһында һүҙ ҡуйыра. Өләсәйем шуға уйынлы-ысынлы әйтеп һалғылай: "Килде замана, күҫәк тоторҙай ҙа ир-ат ҡалманы..."

- Инәкәсең әйтһә, әйтә лә ҡуя инде ул.

- Өләсәйҙән фольклор сыймаҡлап ултырғандарың хәтерҙә. Гәзитсе йә яҙыусы булыр Фәрит, моғайын, тигәйне әбейүшкә. Ә һин - урмансы.

- Һәй, һин бит мин "Йәншишмә" гәзитенең йәш хәбәрсеһе сағымда кейенер-кейенмәҫ өҫтәл аҫтында имгәкләй инең...

Фәрит көлгәс, Алмагөл турһайып, сутырлығын сыҡты.

- Абау, ике йәшкә өлкән, имеш, берәү! Бына тигән ир-атты ымһындырам хәҙер. Үҙең быҙауланып йөрөгәс тә.

- Һайра, әйҙә, һайра, һинең һымаҡ юҡ-барға тырт-мырт үсегә торған ғәҙәтем юҡ...

Йәштәр, көлөшә-гәпләшә һулға ҡайырылып, һарҡыуға ыңғайланы. Фәрит аҙымдарын йәйлатты, зәңгәрһыу ҡара бөркәнсек ябынған тауҙарға һонолоп ҡарағас, Алмагөл һорап ҡуйҙы:

- Баянан бирле әйләнәң дә ҡарайһың, нимәһе албырғата шөкәтһеҙ тауҙарҙың?

- Шөкәтһеҙ түгел, мәғрур, ғәйрәтле, серле беҙҙең тауҙар! Беҙ башҡаларҙан үрҙәрәк йәшәйбеҙ. Диңгеҙ кимәленән кәмендә ярты йә бер километрға бейектәрәк. Минең бер хыялым бар...

- Уртаҡлашһаң, кәмемәҫ ине.

- Кәмемәҫ ине лә ул, тик...

- "Тик"елдәмә, йәме. - Ҡыҙ тауышын баҫып дауам итте. - Стәрлелә генә урта дипломға уҡып, төпкөл ауылда төпләнеп, ҡырыҫланып, әрһеҙләнеп барам, шәт. Ә һин... ҙур ҡалала вуз бөтөп, буйтым интеллигентҡа әйләнгәнһең. Ярай, инәлмәйем. Хыялдың сер булғаны яҡшы.

Фәрит ҡыҙға ыҡсым әйбер һуҙҙы һәм һөйләнеп ҡуйҙы.

- Әйтәм мин һиңә, әйттерәм бынау тауариштан.

- Нимә һуң ул? Йүнләп күренмәй. Әйҙә, ҡайтайыҡ, ай ҙа ҡалҡып бара...

- Мобилка был. Бая һин шуны ишетеп, ҡаршыма йүгергәнһең, тим. Диктофонлы...

- Бәй, Фәрит йырлайҙыр тиһәм! - Алмагөл баҫалҡы ғына хихылданы. - Диктофон, магнитофон... Техничка апай элек магнитофонды "зыйлафун" ти ҙә ҡуя инем, ти.

- Зыйлафун тигәнме? Йәтеш исем тапҡан. Ә мин һиңә һөй-ләфу-ун бирәм.

Тоҡандырып, телефонын ҡыҙға тотторғайны, баяғы йырҙың аҙағы тирә-йүнгә моң һирпте. Егетенең әйтмәй-нитмәй генә ҡараңғылыҡҡа сумғанын һиҙмәй ҙә ҡалған һөйгәне йәшен атҡан тирәк төпһәһенә яҡынайҙы.

- Тәк, тыңлайыҡ төмөҙгә һалып ҡына һөйләфун тигәндәрен. Йә, һөйлә һуң... Ниңә көттөрәһең?

"Ҡәҙерле Алмагөл! - Алмагөл йәнә көлөп ебәрҙе, ләкин шундуҡ тымды. - Беҙ Олотауға бәйле имеш-мимештәрҙе гелән ҡыҙығып тыңлайбыҙ. Малай саҡта миңә йәш ҡолондо хәтерләткән һынташты күрергә насип булды. Йәй ҡоро килһә, элгәре заман тирә-йүндән шунда йыйылып, ямғыр йә аяҙ теләгәндәр. Ә бик борон, эйе, бик борон ғашиҡтар Ҡолонташ эргәһенә барып, мөхәббәттәренә тоғро булырға вәғәҙә бирешкән; тәндәре менән ҡушылғандары ла осраған. Әлбиттә, туйҙан һуң, үҙҙәренә оҡшаған урман ышығында... Был йоланы Алтайҙағы алыҫ ҡәрҙәштәребеҙ һаман онотмаған, буғай. Хөрмәтле Алмагөл! - Ҡыҙ, бер усы менән ауыҙын томалап, мобилканы ҡолағына уҡ терәне. - Һөйөүемде телемдән түгел, күҙемдән эҙлә... Бел: Ҡолонташҡа әйҙәр юлдашым, ғүмерлек йәрем - ул һин...

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# "БАЙЫҠ" РУХЫНДАҒЫ БАЛАЛАР…

## майҙан тотто Күгәрсендә




(Башы 1-се биттә).

### Халыҡ бейеүе өсөн хис мөһим

"Башҡортостан ерендә бер нисә көн эсендә кисергән хистәремде һүҙ менән әйтеп бирерлек түгел. Балалар конкурсының тотош республиканы ялмап алып, бар халыҡтың йыл дауамында ошо бәйгене көтөп йәшәүен күҙ алдына килтерегеҙ әле! Бындай кимәлдәге сараны ғүмеремдә беренсе тапҡыр күрәм", - тигәйне алыҫ араларҙы яҡын итеп килеүсе ҡунаҡтарҙың береһе, Төньяҡ Осетияның "Терек" халыҡ бейеүҙәре ансамбле етәксеһе Олег Дудиев. Уның фекеренсә, халыҡ бейеүе онотолоуға дусар ителһә, халыҡ үҙе лә яйлап юҡҡа сыға, сөнки бейеү - ул халыҡтың күңел хазинаһын, уның донъяға ҡарашын сағылдырыусы ғына түгел, ә рух сығанағы ла. Ошоларҙы һәм биш йыл эсендә бәйгелә меңәрләгән малай-ҡыҙҙың үҙ көсөн һынап ҡарауын иҫәпкә алып, "Байыҡ" рухында тәрбиәләнгән киләсәгебеҙ өсөн проект авторы Рита Өмөтбаеваға, шулай уҡ ошо йәш бейеүселәрҙең ата-әсәләренә, районлар һәм ҡалаларҙа балалар өсөн бейеүҙәр һалған хореографтарға, бала күңелен үҫтерә белеүсе баһалама ағзаларына рәхмәт һүҙҙәрен еткерге килә. Халыҡ бейеүе - үҙе үк күңелдә оло байрам тойғолары уятырға һәләтле сәнғәт төрө, тик шулай ҙа сабыйҙарҙың тоғро дуҫтары араһында Күгәрсен районы хакимиәте хеҙмәткәрҙәре, шәхсән хакимиәт башлығы Фәрит Мырҙагилде улы Мусин булмаһа, был байрам әлеге кимәлгә етә алмаҫ ине, ай-һай! Матур тәбиғәт ҡосағында тирмәләр ҡороп, ҡаҙандар аҫып, килгән һәр кешене ихлас ҡаршы алды күгәрсендәр. Бейеүсе өсөн тамашасы булыуы шарт, халыҡ та бәләкәс таланттарҙы үҙенең иғтибарынан мәхрүм итмәне. БР Хөкүмәте вице-премьеры Лилиә Салауат ҡыҙы Ғүмәрова иһә бәләкәстәргә Президенттың сәләмен тапшырҙы.

Бәйгенең жюри рәйесе, Башҡортостандың халыҡ артисы Радмир Бәҙретдинов билдәләүенсә, был проект балаларҙы матурлыҡ донъяһына алып инә, бейеүҙәребеҙ тергеҙелә һәм боронғо йола буйынса, быуындан-быуынға тапшырыла. "Йылдан-йыл хәрәкәттәрҙә үҫеш һиҙелә, сәхнәлә батырлыҡ, оҫталыҡ, артистизм, драматургия барлыҡҡа килде. Бөгөн балалар, яңылышып ҡуймайым, тип, күҙҙәре менән күршеһенә ҡарап түгел, ә йөрәге менән тойоп, ихлас күңелдән бейей. Яратыу тойғоһон теле менән түгел, йөрәге менән белгертеү мөһим. Бейеүҙә лә шулай, ун кеше араһында бераү генә йөрәге менән бейей икән, уны шунда уҡ тояһың", - тип, бейеүсе балаларҙан шул тиклем ҡәнәғәт булыуын белдерҙе халыҡ бейеүенә бар ғүмерен арнаған бейеүсе.

### Батыр егет - ил күрке…

Радмир ағай юҡҡа ғына, сәхнәлә батырлыҡ барлыҡҡа килде, тип әйтмәне. Ҡыҙҙар бейеүе һалмағыраҡ, тыныҫыраҡ булһа, ир-егеттәр башҡарған бейеүҙәр ҙур психологик тәьҫир көсөнә эйә. Төрлө йылдарҙа Гран-при алыусы егеттәр - Денис Әхмәтов, Айназ Низаметдинов, Рәфис Иҙрисов, Фидель Кәримов башҡарыуында "Генерал Игзаков", "Рекрут", "Һунарсы" хатта бейеүгә битараф булғандарҙың да йөрәген ҡуҙғытып ебәргәндер. Башҡорт бейеүенә генә хас тыпырлау йөрәкте ҡуҙғытып, гәмде уятыр сифатҡа эйә шул. Ошондай бейеүҙәрҙең конкурсҡа күпләп тәҡдим ителеүе батырлыҡтың сәхнәләребеҙгә генә түгел, егеттәребеҙҙең йөрәктәрендә лә ҡанат ҡағыныуы, тип аңларға кәрәктәр.

Ҡырмыҫҡалы районының "Йондоҙ" ансамбле башҡарыуындағы "Азамат" бейеүе, Күгәрсен районы триоһының "Башҡорт яугирҙәре", Әбйәлил егете Рифат Сәйетғәлиндың "Солтанаҡ ейәне" бейеүе шулай уҡ төрлө бүләкләүҙәргә, ә Рәмзил Айытколов, Рәмзил Сәфәрғәлин һәм Ибраһим Баймырҙиндан торған Күгәрсен командаһы Гран-Приға лайыҡ булды. Айырым башҡарыусылар араһында Гран-при Ғафури егетенә - 10 йәшлек Искәндәр Әҙелғужинға эләкте. Ихлас, көлөп кенә торған был ғәжәйеп матур бала "Һунарсы" бейеүен башҡарҙы. Батыр егет - ил күрке, был егеттәрҙең һәр береһе ил ағаһы дәрәжәһенә күтәрелеп, күҙ өҫтөндәге ҡаш булып, халҡыбыҙҙы данлар көндәр алда булһын.

### …"Байыҡ" - сәхнә күрке

"Байыҡ" бейеүенә халҡыбыҙҙың мөнәсәбәте лә үҙенсәлекле. Бик боронғо, ҡәҙерле бейеүҙәрҙән иҫәпләнә ул. Төҙәрәк эпик тамаша барышында башҡарыла, һуңғараҡ айырым бейеү булып формалашып китә. Байыҡ Айҙар сәсән исеме менән бәйле был бейеүҙең төрлө төбәктәрҙә һаҡланған бер нисә варианты бар, сөнки яугир сәсәндең батша эҙәрлекләүҙәренән ҡасып йөрөгән ерҙәрендә үҙе йырлап, бейегән бейеүе халыҡтың хәтерендә "Байыҡ" бейеүе булараҡ һаҡланып ҡала. "Байыҡ" бейеүен оҫта башҡарыусы булып иҫәпләнгән Мөхәммәт Иҙрисовтың бейеп йөрөй торғас, һамаҡлап, таҡмаҡлап алыуын күптәр әле лә иҫләйҙәр.

"Байыҡ" бәйгеһенең исеменә еҫемен тап килтереп, был юлы ла "Байыҡ" бейеүен алып килеүсе маһирҙар булыуы бик шатландырҙы. Үҙ ғүмерендә күпте күргән, әммә энергияһын, ҡеүәтен, тормошто ятратыуын юғалтмаған оло кешене һүрәтләп бейеүсе юмор тойғоһо ла булырға тейеш. Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылынан килгән Алмаз Ғәбитов ошоларҙы күҙ уңында тотоп, "Байыҡ"ты үҙенә генә хас башҡарыу техникаһы менән бейеп, барыһын да таң ҡалдырҙы. Бишенсе класты тамамлаған Алмазды бейергә йәш хореограф Марсель Мөхәмәтғәлин өйрәтә. Педагог профессиональ белемле булһа ла, башҡорт бейеүен башҡарыу нескәлектәрен олатаһы Әхәт Мөхәмәтғәлиндан һеңдереп ҡалған икән. Тимәк, Алмаздың тап бөрйәндәрсә, үксә менән төйөп бейей белеүенә быуындар сылбыры өҙөлмәүе сәбәпсе. "Ғөмүмән, Бөрйән районында башҡорт бейеүенә ҡарата һаҡсыл ҡараш бар, - ти Байназар ауылынан килгән хореограф Айгөл Буранова. - Халыҡ араһында һаҡланып ҡалған бейеүҙәрҙе балаларға өйрәтеп ҡалдырырға тырышабыҙ. Рухланып, башҡортмон, тип үҫһендәр. Әле бер ғаилә парында БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, данлыҡлы бейеүсе Йәнғәле Вәхитов мәрхүмдең "Дуҫлыҡ" бейеүе һаҡланған, яҡын киләсәктә ошо бейеүҙе өйрәнеү хыялы менән йәшәйем". Әйткәндәй, байназарҙар - Айҙар Буранов менән Зөлхизә Нурғәлина ошо уҡ хореографтың "Ҡоҙаса" бейеүен башҡарып, "Дуэт" номинацияһында икенсе урын яуланы, Алмаз Ғәбитов шулай уҡ икенсе урынға лайыҡ булды.

"Үҫәргән байығы"н башҡарыусы икенсе шәп егетебеҙ Хәйбулла районынан килгәйне. "Соло" номинацияһында беренсе урын яулаусы Нурислам Юламановҡа етә генә йәш. Ул Аҡъяр балалар ижад йортонда Физәлиә Тулыбаева етәкселегендә шөғөлләнә.

### Бейеү халыҡсан булырға тейеш

Бейеү - әлеге көндә иң популяр сәнғәт төрө булһа ла, Фәйзи Ғәскәровтың кеүек халыҡтың холоҡ-ҡылығын бар нескәлегендә тойоп бейеү ижад итеүселәр һирәк хәҙер. Учалы районының "Оҙонгүл" бейеү ансамбле был талантлы бейеүсе һәм балетмейстерҙың "Ҡороҡсолар" бейеүен алып килеп, башҡорт бейеүенең ниндәй юғарылыҡҡа тороуын иҫебеҙгә төшөрөп, хәтерҙәрҙе яңыртты. "Ҡороҡсолар" - шаян бейеү һәм ошо бәләкәй генә үҙенсәлекле спектаклдә беҙ башҡорт ир-егеттәренең сослоғон, йәш ҡыҙҙарҙың ҡыйыулығын ғына түгел, ә олораҡ йәштәге ағайҙарҙың мутлығын, еңгәйҙәрҙең наянлығын, уның ҡәйнештәре менән мөнәсәбәтен, ҡатын-ҡыҙҙың йәмғиәттәге тотҡан статусына ҡарап, кейемдәге айырмалыҡтарҙы күреп өлгөрәбеҙ. Бейеү бына ошолай халыҡсан булырға тейеш. "Оҙонгүл" ансамбленә Ф. Ғәскәров исемендәге Башҡорт дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле махсус приз тапшырҙы.

Бәйгелә башҡорт бейеүенең алтын фондын тәшкил иткән башҡа бейеүҙәр ҙа булды. Әбйәлил районының "Ынйыҡай" ансамбле "Ете ҡыҙ"ҙы башҡарып, бәләкәй коллективтар араһында икенсе дәрәжә диплом менән бүләкләнде.

### Булыр бала - бишектән

Техник яҡтан башҡорт бейеүен башҡарырға өйрәтеп булалыр, әммә уны тойоу, йөрәгең менән яратыу һәләте һирәктәргә генә бирелә. Сәхнә артында үҙенән бер-ике башҡа ғына ҙурыраҡ бейеүсе апайҙарының ҡояшта йылтылдап торған күлдәк-камзулдарын, һәр хәрәкәткә зыңлап киткән тәңкәләрен тотоп ҡарап йөрөй торғас, үҙе лә дәртләнеп, иҫ киткес оҫта итеп бейеп киткән ике йәш ярымлыҡ Мәҙинә Баймырҙина, бәйгелә "Иң йәш еңеүсе" номинацияһына лайыҡ булған дүрт йәшлек Әлиә Мөхәтдиноваларға ҡарап, ирекһеҙҙән, "Булыр бала - биләүҙән" тигән мәҡәлдең дөрөҫлөгөнә инанаһың. Мәҙинә Хәйбулла районы ҡыҙы, атаһы менән әсәһе эштән бушамаҫ, "Байыҡ"ҡа уны Баймаҡта йәшәүсе өләсәһе Мәрйәм менән ҡартатаһы Миңлехан Дәүләтбаевтар алып килгән. Ә Әлиәнең атаһы Әбүзәр ҙә, әсәһе Лилиә лә ҡасандыр Әбйәлил районының данлыҡлы "Йәшлек" ансамблендә бейегән, уларҙың был шөғөлөн хәҙер ҡыҙҙары дауам итә. Айыуҙы ла бейетергә өйрәтеп була, тигән булалар, юҡ шул, башҡорт бейеүенә һөйөү ул ҡандан, нәҫелдән килә.

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**Иҫ киткес күркәм был сара тураһында туктамайынса әллә нисә көн һөйләргә булыр ине. Бейей белгән кеше бейеүенән кинәнер, ти халыҡ, шуға ла бында кемдең ниндәй урынға лайыҡ булыуы ла мөһим түгел, уларҙың барыһы ла еңеүсе. Ярты меңгә яҡын талантлы баланың һәр береһе һәләте, матурлығы, ихласлығы һәм башҡорт бейеүенә булған ятратыуы менән һәр беребеҙҙең күңелендә уйылып ҡалды.**

**Һәм тағы ла. Талант һәм матурлыҡ тигәндән. Әлиә Мөхәтдинова бейеп, сәхнәнән төшкәс, Төньяҡ Осетиянан килгән алан егете уның алдына теҙләнеп, ҡулдарынан үпте. "Башҡорт ҡыҙҙарына ундай мөнәсәбәттә булырға ярамай", тигән башҡорт егете нимәне күҙ уңында тотҡандыр, минеңсә, был егет матурлыҡ, талант һәм булаcаҡ әсә алдында баш әйеп, үҙенең хөрмәтен белдерҙе. "Ир-егет сәнгелдәк бәүелткән ҡулдарҙы хәстәрләргә, ярҙам итергә һәм һаҡларға тейеш, сөнки ысынында һәр бөйөк ир-егет артында Әсә тора", тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен тау халыҡтары тәрәнерәк аңлай шул. Шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡында ла Әсә иң дәрәжәләләрҙән һаналған, хатта яу башланып торғанда ҡатын кеше башындағы яулығын сисеп, улар араһына һалыу менән яуҙар туктаған. Йөрәктәребеҙгә батырлыҡ менән бер рәттән, матурлыҡҡа һоҡлана белеү, ҡатын-ҡыҙға Әсә итеп, ихтирам менән ҡарай белеү әйләнеп ҡайтһа, милләтебеҙҙең киләсәге тағы яҡтыраҡ буласаҡ.**

Ләйсән ДАЯНОВА.

ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕХНОЛОГИЯЛАРҘАН... йәштәр аҡылһыҙланамы?

■ Джорджия штатының Атланта ғалимдары белдереүенсә, үҫендең тирә-яғында гел генә таҙа тоторға тырышыу депрессияға килтерә. Яңыраҡ Британия ғалимдары был сәйер ғәҙәттәр исемлеген тағы ла тулыландырған. Лондондың Cranley клиникаһы дерматологы Ника Лоу әйтеүенсә, ҡулдарҙы йыш йыуыу ҙа насар, йылы һыу һәм һабын ҡул тиреһенең кибеүенә килтерә. Лафборо университеты профессоры Джим Хорн 8 сәғәттән күберәк йоҡламаҫҡа кәңәш итә, юғиһә, арыу тойғоһо барлыҡҡа киләсәк. Оҙаҡ йоҡлау урынына көндөҙ 4-15 минут серем итеп алыу файҙалыраҡ икән. Стоматолог Фил Стеммер теште таҙартҡандан һуң ауыҙҙы һыу менән сайҡайтыуҙы ла насар ғәҙәткә һанай, сөнки теш пастаһының файҙалы матдәләре йыуыла. Бынан тыш, ашағандан һуң тештәрҙе йыуырға ярамай, аҙыҡ-түлек теш эмален йомшарта һәм уға кире үҙенең элекке хәленә ҡайтыу өсөн ярты сәғәт тирәһе ваҡыт кәрәк.

■ Ир-егет магазиндар буйлап оҙаҡ йөрөй алмай. Британия социологтары үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар белдереүенсә, был ваҡыт минутҡа тиң. Яуап биреүселәрҙең 80 проценты әйтеүенсә, кейемһалым һатып алыу сикһеҙ күңелһеҙ шөғөл, ә респонденттарҙың 45 проценты магазиндар буйлап йөрөүҙән бөтөнләй баш тарта. Һәр дүртенсе ир-егет был шөғөлдән шул тиклем арый, хатта тиҙ арала өйөнә ҡайтып китә. Яуап биреүселәрҙең яртыһы магазиндар буйлап сәйәхәт иткәндә ҡатыны менән мөтлаҡ һуҙға килешә.

■ Үҙ-үҙе менән һөйләшеүселәр килеп тыуған төрлө проблемаларҙы тиҙерәк һәм һөҙөмтәлерәк сисә, тип раҫлай Американың Висконсин-Медисон университеты психологтары. Улар үткәргән һынауҙарҙа ҡатнашыусылар ике төркөмгә бүленгән һәм юғалған әйберҙәрҙе эҙләгән. Беренсе төркөм быны ҡысҡырып, икенсеһе тауыш-тынһыҙ башҡарған. Тәүге төркөм мәсьәләне шундуҡ хәл иткән. Һөйләшеү мейенең дөйөм әүҙемлеген көсәйтә һәм ҡабул итеүҙе әүҙемләштерә, һөҙөмтәлә алға ҡуйылған проблеманы тиҙерәк хәл итеү мөмкинлеге көсәйә.

■ Саф һауала күберәк йөрөү кешенең интеллектуаль кимәлендә ыңғай сағылыш таба. Бындай һығымтаға Америка Ҡушма Штаттарының Иллинойс штаты университеты нейрохирургтары килгән. Тикшеренеүселәр төркөмө етәксеһе, профессор Арт Крамер фекеренсә, әгәр ҙә кеше аҙнаһына 40 минут ҡына булһа ла йәйәү йөрөһә, унын интеллектуаль мөмкинлектәре күпкә күтәреләсәк. Ғалимдар әйтеүенсә, ошондай йөйәүле сәйәхәттәр ваҡытында кеше төрлө тышҡы ҡуҙғытыусыларға иғтибар итергә мәжбүр була һәм һөҙөмтәлә баш мейеһенең функциональ әүҙемлеге күтәрелә.

*Көньяҡ Корея ғалимдары билдәләүенсә, үҫмерҙәрҙең аҡыл һәләтенә өр-яңы гаджеттар кире йоғонто яһай. Йәштәрҙең аҡыл ҡеүәһе үҙгәреүе баш йәрәхәте йәки психиатрия ауырыуы кисергән кешеләрҙекенә оҡшаш бара. Эксперттар иҫәпләүенсә, уларҙың "аҡылһыҙлана" барыуында уйын приставкалары һәм телефондар ғәйепле. Табиптар яңы ҡуркыныс - "диджитал-аҡылға зәғифлек" хаҡында ла иҫкәртә. Йәш кеше шул тиклем был технологияларға ышана, хатта ябай ғына мәғлүмәтте лә хәтерендә ҡалдыра алмай, когнитив һәләттәр кәмей.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЭҪЕЛӘ ӨС ХӘҮЕФ ҺАҒАЛАЙ

**Йәй - рәхәт һәм күңелле мәл, тип уйларға күнекһәк тә, врачтар беҙҙе кеше сәләмәтлегенә янаусы өс хәүефтән һаҡ булыу кәрәклеге хаҡында иҫкәртә, сөнки йәй көндәре лә дауахана юлын тапаусылар һис кәмемәй, тик сир сәбәптәре генә башҡасараҡ.**

● **Ағыуланыу.** Эҫе көндәрҙә ҡайнар аш әҙерләргә килмәй, әлбиттә, ләкин санитар табиптар һәм диетологтар иҫкәртеүенсә, яңы ғына яһалған салат, һалҡын аш-һыуҙы оҙаҡ һаҡларға, хатта һыуытҡыста ла тоторға ярамай, ризыҡты ашар алдынан ғына һәм үҙегеҙгә етерлек күләмдә генә әҙерләргә, тип кәңәш бирә диетологтар. Йәшелсә-емеште ныҡлап, ентекле итеп йыуырға, ағып торған һыуҙа оҙаҡ ҡына тотоп алырға кәрәк. Баҙарҙан ит һатып алыуҙан тыйылығыҙ: бындай эҫелә ул бер нисә сәғәт эсендә зарарлы бактериялар менән ҡапланасаҡ. Балыҡ иткә ҡарағанда ла тиҙерәк боҙола. Әгәр ҙә инде берәй ярамаған нәмә ашап, үҙегеҙҙе насар тоя башлаһағыҙ, күберәк һыу эсегеҙ. Энтеросгель, активлаштырылған күмер, шулай уҡ ҡоҫоу һәм эс китеүҙе туҡтата торған регидрон, смекта кеүек препараттар ярҙамға килер. Температурағыҙ күтәрелгән осраҡта "Ашығыс ярҙам" саҡыртығыҙ.

● **Һыуыҡ тейеү, пневмония.** Һыуыҡ тейеү ҡыш мәленә генә хас сир түгел. Йәй ул күпкә ҡурҡынысыраҡ та хатта. Вирустар бит йыл әйләнәһенә "йоҡламай" ҡорбандарын һағалай. Йәй көндәре тымауға сәбәпсе риновирустар; эсәк ауырыуын тыуҙырыусы ротавирустар; ҡолаҡ-тамаҡ шешенә килтереүсе аденовирустар ныҡ әүҙемләшә. Иммунологтар әйтеүенсә, бындай ваҡытта айырыуса кондиционерҙар хәүеф тыуҙыра, бигерәк тә улар бәләкәй бүлмәлә һәм төндә эшләп торһа. Сөнки йоҡлағанда организм һыуыҡ тәьҫирен тоймай. Температураның киҫкен үҙгәреп тороуы ла насар тәьҫир итә, мәҫәлән, эсенән һыуыҡ бинаға инеү, һәм - киреһенсә. Шул да бик мөһим: үтә һалҡын эсемлектәр менән мауыҡмағыҙ, ҙур ҡабымдар менән туңдырма ашамағыҙ: организм өсөн эҫелә был да бик ҙур стресс тыуҙыра. Эҫелә эш менән үҙегеҙҙе артыҡ йонсотмағыҙ: стрестар менән хәлһеҙләнгән организмға вирустар тиҙерәк һәм ҡаршылыҡһыҙ йоғоусан икәнде иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

● **Цистит.** Был да нигеҙҙә көҙ һәм ҡышҡы осор бәләһе, тип уйлайбыҙ, ләкин был сирҙең йылына ике-өс мәртәбә ҡабатланып ала торған "гәзәте" бар. Йәй ул күпселек осраҡта йылға-күлдәрҙә, быуаларҙа һыу ингәндән һуң башлана. Шул саҡ ҡайһы берәүҙәр тота ла үҙ белдеге менән антибиотик эсә башлай. Ләкин беҙ был препараттарҙы күберәк ҡабул иткән һайын, организм уға нығыраҡ өйрәнә, ярарлаша һәм тәьҫир көсөн юғалта. Циститтың сәбәптәре күп, ләкин йыш ҡына ул зарарлы эсәк таяҡсаларынан башлана. Ул һейҙек ҡыуығына үтеп инә һәм билдәле бер шарттарҙа (мәҫәлән, иммунитет ҡаҡшағанда) ялҡынһыныу - цистит башланып китеүе ихтимал. Күп һыу инеүҙән өшөү, һыу ятҡылыҡтарының санитар талаптарға яуап бирмәүе, хатта тоҙло һәм ҡырҡыу ризыҡтар ашау ҙа сәбәп булыуы мөмкин. Бындай осраҡтарҙа үҙ белдегең менән дауаланыу сирҙе ваҡытлыса ғына туҡтатыуға мөмкинлек бирә, унайы тыуғас, уның ҡабатланыуы ихтимал, шуға күрә урологҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Хәҙер һейҙек ҡыуығы иммунитетын нығыта торған яңы быуын препараттар төркөмө бар, был инде өләсәйегеҙҙең үләндәре түгел. Уролог кәңәше һеҙҙе был сирҙең аҙып китеүенән ҡотҡарыр.

Фатиха ИШБИРҘИНА әҙерләне.

# ЭКЗЕМА ТУРАҺЫНДА...

## алты уйҙырма

**Күптәр иҫәпләүенсә, тирелэге сабыртмалар - балалар проблемаһы һәм өлкәнәйә барыу менән ул үтәсәк. Был экзема тураһындағы берҙән-бер уйҙырма түгел.**

Ғалимдар был сирҙең килеп сығыуы тураһында күптән бәхәсләшә. Экзема (тимерәү) - ҡабатлана торған нейроаллергодерматоз, ҡысыттырып, ҡутырлап торған йоғошһоҙ тире ауырыуы. Берәүҙәр, экзема - нервылар ҡаҡшауы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә, тип раҫлаһа, икенселәре уны аллергик сирҙәр рәтенә индерә. Дөрөҫләк уларҙың уртаһында булып сыға. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, экземаның килеп сығыу сәбәбе ҡатнаш характерлы, ә уны барлыҡҡа килтереүҙә тышҡы һәм эске факторҙар, мәҫәлән, ашҡаҙан-эсәк, бауыр, бөйөр һәм, әлбиттә, эндокрин һәм нервылар ситемаһы ауырыуҙары тора. Хәүеф төркөмөндә ҙур нервылар көсөргәнеше кисерергә мәжбүр булған 25-40 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар тора.

**➔ Экземаны ҡояш һәм диңгеҙ яҡшы дауалай.**

Был дөрөҫ түгел. Ҡомда ҡыҙынғанда беҙ тирләйбеҙ, ә ультрафиолет тирене киптерә. Был факторҙар ауырыуҙы көсәйтә генә. Ҡояш ремиссия ваҡытында, йәғни ауырыуҙың билдәләре үҙен белдермәй башлаған саҡта ғына файҙалы. Диңгеҙ тураһында ла шуны уҡ әйтергә мөмкин: ҡайһы бер осраҡтарҙа экзема тап диңгеҙҙә ял иткән саҡта көсәйә.

**➔ Һыу ҡуҙғыуҙы көсәйтә.**

Дөрөҫ. Ауырыу киҫкенләшкән саҡта тиренең ҡуҙғыған өлөшөнә һыу тейҙермәү яҡшыраҡ. Әгәр ҙә был мөмкин булмаһа, эҫе һыу менән түгел, ә йылы һыу менән генә йыуынығыҙ. Балалар өсөн тәғәйенләнгән йыуыныу саралары ҡулланығыҙ. Душтан һуң тиренең зарарланған өлөштәрен таҫтамал менән иплән кенә ҡоротоғоҙ, махсус крем һөртөгөҙ.

**➔ Тире ҡуҙғыған саҡта уға майлы крем һөртөп, бәйләргә кәрәк.**

Дөрөҫ түгел. Косметик кремдар ҡулланырға ярамай, улар яраға инфекция индереүе ихтимал. Дерматологияла шундай ҡағиҙә бар: еүеш сабырмалар - еүеш, ҡоролары ҡоро саралар менән дауалана. Һылы тимерәү ваҡытында юғары һылы составлы кремдар һәм эмульсиялар ярҙам итә. Ҡоро тимерәүҙе майҙар менән дауалайҙар.

**➔ Экзема витаминдар дефицитынан барлыҡҡа килә.**

Был турала аныҡ мәғлүмәттәр юҡ. В төркөмө витаминдары көслө аллерген иҫәпләнә. Экзема ваҡытында С витамины ғына файҙалы, сөнки ул кортикостероид гормондары синтезы өсөн материал булып тора. Тап улар экземаға ҡаршы майҙар һәм кремдар составына инә.

**➔ Экземаны дауаларға кәрәкмәй, ул үҙе үтә.**

Дөрөҫ түгел. Дауалауһыҙ экзема үтмәйәсәк. Ни тиклем тиҙерәк дерматологҡа мөрәжәғәт итһәгеҙ, шул тиклем яҡшыраҡ.

**➔ Был проблема мәлендә мотлаҡ диета кәрәк.**

Ысынлап та шулай. Иң тәүҙә цитрустарҙан, тоҙло, ыҫланған ризыҡтарҙан, шоколадтан, татлы ризыҡтарҙан, консерваларҙан, тәм көсәйтеүселәрҙән баш тартырға кәрәк. Бынан тыш, йорт эштәрен мотлаҡ резина бирсәткәләрҙә башҡарыу тирене химик ҡуҙғыткыстарҙан һаҡлай. Стресс осраҡтары ауырыуҙы көсәйтә генә.

Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1434 һижри йыл.*

| Июль - август | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 30, шишәмбе | 4:24 | 4:54 | 14:30 | 20:49 | 22:19 | 23:49 |
| 31, шаршамбы | 4:26 | 4:56 | 14:30 | 20:47 | 22:17 | 23:47 |
| 1, кесе йома | 4:28 | 4:58 | 14:30 | 20:45 | 22:15 | 23:45 |
| 2, йома | 4:30 | 5:00 | 14:30 | 20:43 | 22:13 | 23:43 |
| 3, шәмбе | 4:31 | 5:01 | 14:30 | 20:41 | 22:11 | 23:41 |
| 4, йәкшәмбе | 4:33 | 5:03 | 14:30 | 20:40 | 22:10 | 23:40 |
| 5, дүшәмбе | 4:35 | 5:05 | 14:30 | 20:38 | 22:08 | 23:38 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

**Рамаҙан айының һәр көнө оло ҡиммәткә эйә. Ә шулай ҙа иң ҙур бәрәкәте, Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡолдарына әҙерләнгән иң ҙур әжере һуңғы ун көндә йәшеренгән. Шуға күрә лә, Бәйғәмбәребеҙ (с.а.с) тап ошо ваҡытта ҡылған ғибәҙәттәрен тағы ла арттырған. Туғандарын да төндәрен уятып, Аллаһы Тәғәләне иҫкә алырға өндәгән. Һуңғы ун көндөң оло ҡиммәткә эйә булыуының сәбәбе кешегә ике донъяла ла бәхет ҡаҙаныуға булышлыҡ иткән иң бәрәкәтле, иң ҡиммәтле ваҡыттың - Ҡәҙер төнөнөң тап ошо көндәргә тура килеүенә бәйле. Аллаһы Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә был төн хаҡында "мең айҙан да изгерәк" тип әйтә.**

# ҠӘҘЕР ТӨНӨ...

## мең айҙан да изгерәк

Риүәйәттәр шуны бәйән итә: "Шәмғун исемле кеше әле үҙгәрмәгән Тәүратҡа буйһоноп йәшәгән. Ә уны уратып алған йәмғиәт поттарға табынған. Шәмғун Аллаһы Тәғәләне инҡар итеп, ҙҙҙәре яһаған илаһтарға табынған кешеләрҙе хаҡ юлға саҡырған, тәкәбберҙәре менән көрәш алып барған. Дошмандары уны төрлөсә юҡ итергә тырышҡан, әммә ул һәр саҡ ҡотолоп ҡалған. Шәмғун көндәрен ураҙала үткәрһә, төндәрен намаҙҙан айырылмаған. Бер ваҡыт Мөхәммәт бәйғәмбәр, Шәмғунды күҙ уңында тотоп, сәхәбәләренә: "Бер йәһүди Аллаһ юлында мең ай көрәшкән, хаҡ юлға саҡырған", - тип әйтә. "Мең ай?" - ти ғәжәпләнә сәхәбәләр. Ә береһе: "Беҙҙең бар тормошобоҙ ул тиклем изгелек эшләргә етмәйәсәк. Нисек беҙ ҙә шул дәрәжәгә етә алабыҙ?" - тип һорап ҡуя. Шул ваҡыт фәрештәләр башлығы Ябраил ғәләйһиссәләм Бәйғәмбәребеҙгә: "Йә, Мөхәммәт, әйт! Аллаһы Тәғәлә һиңә бынан да яҡшыраҡ игелек ебәрҙе", - ти һәм "Әл-Ҡәдр" сүрәһен уҡый: "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим! Ысынлап та, Беҙ уны (Ҡөрьәнде) ҡөндерҙек Ҡәҙер төнөндә. Ҡәҙер төнөнөң ни икәнен беләһеңме? Ҡәҙер төнө мең айҙан да изгерәк! Ул төндә Раббы рөхсәте буйынса фәрештәләр менән Рух (Ябраил фәрештә) төрлө әмер алып төшә. Ул төндә таң атҡансы именлек була".

Ҡәҙер кисенең башҡа кистәр араһынан һайланып алыныуының сәбәптәре тураһында ғалимдар араһында төрлө фекерҙәр бар. Тап ошо кистә Аллаһы Тәғәлә Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләмде) бәйғәмбәр итеп һайлай. Ерҙә йәшәүсе бар кешеләрҙең хаҡ юл күрһәтеүсе булған Ҡөрьән инә башлай. Ҡайһы бер хәҙистәрҙә әйтелеүенсә, Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бүтән өммәттәрҙең оҙон ғүмерле булыуын һәм үҙенең өммәтенең ҡыҫҡа ғүмерле булыуын күргән. Әгәр ҙә Аллаһ илсеһенең өммәте башҡа өммәттәр менән яҡшы эштәрҙә тиңләшергә теләһә, был мөмкин булмаҫ ине. Бәйғәмбәребеҙҙең күңеле төшкән. Һәм ғәҙеллек булдырыр өсөн Аллаһы уға ошо төндө биргән.

Ҡәҙер кисенең мең айҙан да хәйерлерәк тип әйтелеүе был кистә эшләнгән изгелектәрҙең мең ай буйы ҡылынған яҡшылыҡтарға ҡарағанда ла сауаплыраҡ икәнен аңлата. Фәрештәләрҙең ергә күпләп төшөүе Аллаһтың кешеләргә ҡарата оло мәрхәмәтлелеген күрһәтә. Фәрештәләр шул тиклем күп була. Улар бөтәһе лә Аллаһы Тәғәлә юлында йәшәүселәрҙең, эшләүселәрҙең, ғибәҙәт ҡылыусыларҙың гонаһтары ярлыҡаныуы өсөн доға ҡылалар. Таң атҡас, Ябраил ғәләйһиссәләм фәрештәләрҙе үҙе янына саҡыра. Фәрештәләр унан: "Йә, Ябраил! Мөъминдәрҙең гонаһтарын ярлыҡауҙы һорап ҡылған доғаларыбыҙҙы Аллаһы Тәғәлә ҡабул иттеме?" - тип һорай. Ябраил ғәләйһиссәләм: "Аллаһы Тәғәлә дүрт төркөм кешеләрҙән башҡа бөтә мөъминдәрҙең дә гонаһтарын ғәфү итте. Ғәфү ителмәүселәр: эскән кешеләр, атаәсәһен тыңламаусылар, туғанлыҡ ептәрен өҙөүселәр, дин ҡәрҙәше менән өс көндән артыҡ аралашмаусылар", - ти. Шуныһы ла бар: был көндө шайтан бер кемгә лә зыян килтерә алмай, ул тулыһынса көсөнән яҙа.

Ҡәҙер төндә ошо төн өсөн генә хас булған үҙенсәлектәр шул: ай яҡтылығына ла, ҡояш яҡтылығына ла, башҡа бер ниндәй яҡтылыҡҡа ла хас булмаған яҡтылыҡ, ағастар, бөтә үҫемлектәр ҡылған сәждәләр, ҡанатлы фәрештәләрҙе күреү һәм уларҙың тауыштарын ишетеү мөмкинлеге. Был көндә ҡояштың ҡалҡыуы ла бүтән көндәрҙәгенән айырыла. Аллаһы Тәғәлә уларҙы теләгән ҡолдарына күрһәтә. Әгәр ғибәҙәт менән үткәрелгән төн Ҡәҙер төнө менән тап килһә, үрҙә әйтелгән мөғжизәләрҙе күрмәгәндә лә, шундай уҡ әжер аласаҡ мөъмин.

Ҡәҙер төнөнөң ниндәй төндә булыуын дөрөҫ кенә әйтеп булмай. Ислам донъяһында Рамаҙан айының 27 төнө тигән дөйөм ҡараш йәшәһә лә, бер кем дә Ҡәҙер төнө тап ошо төндә буласаҡ тип раҫлай алмай. Аллаһы Тәғәлә ул төндө үҙенең ҡолдарынан йәшереп, мөъминдәр өсөн ҙур изгелек күрһәткән. Сөнки Раббыһына хеҙмәт итергә теләүселәр ошо төндә генә түгел, ә ай дауамында тоғро хеҙмәттә буласаҡтар. Бигерәк тә Рамаҙандың һуңғы ун көнөндә әүҙемлек күрһәтәсәктәр. Әгәр был төн билдәле булһа, ай буйына хеҙмәт итеүгә бирелгән әжерҙән баш тартып, мосолмандар ошо төндә генә ғибәҙәттә булырҙар ине. Шулай ҙа Ҡәҙер төнөнөң Рамаҙан айының һуңғы таҡ төндәрендә йәшеренгәнен Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең: "Ләйләтүл Ҡадр төнөн Рамаҙан айының һуңғы ун көнөнөң таҡ төндәрендә эҙләгеҙ", - тигән хәҙисе раҫлай. Шулай уҡ Ислам диненең ҙур ғалимдары һәм әүлиәләре лә Ҡәҙер төнөн Рамаҙан айының **21, 23, 25, 27, 29 (29,31 июль, 2, 4, 6 август)** төндәренә тап килеүе тураһында һөйләй.

"Ҡәҙер кисендә инанып, сауабын өмөт итеп, ғибәҙәт ҡылғандарҙың бөтә гонаһын Аллаһы Тәғәлә ғәфү итер", - ти Бәйғәмбәребеҙ. Был кистә мосолмандар Ҡөрьән уҡый, тәүбә итә, башҡа мосолмандарҙы һөйөндөрөрлөк эштәр башҡара, үҙҙәренең теләктәрен Хоҙай Тәғәләгә еткерә, изге эштәр менән генә булыша, зекер, салауаттар әйтеп, Аллаһы Тәғәләгә тағы ла нығыраҡ яҡыная. Ғәйшә (раҙиаллаху анху) Аллаһ илсеһенән был төндә ниндәй доға әйтергә кәрәклеге тураһында һорашҡан. "Йә раббым! Һин ғәфү итәһең, һин ғәфү итергә яратаһың, шулай икән, мине лә ғәфү ит, тип доға ҡыл", - тигән уға Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм).

Һикһән өс йыл дауамында донъя эштәренән айырылмайынса ғибәҙәттәрҙә генә үткәреүгә тиң оло әжер-сауап алырға насип итһен Раббыбыҙ был Ҡәҙер кисендә.

**Азамат ӘБУТАЛИПОВ әҙерләне.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

## Йәшәйеш еле

Мин тирә-яғымда ваҡыт етмәгәнлеккә зарланмай ғына йәшәүселәрҙе осратманым. Ваҡытты файҙалы үткәреү темаһына һөйләшергә кеше лә тапманым, шуға күрә үҙ аллы үҫештем. Бына инде 18 йыл иртәнге сәғәт биштә йоҡонан торам да, киске сәғәт 11-ҙән дә ҡалмай йоҡларға ятам. Йоҡоһоҙлоҡтон, арыуҙың һәм үлемдән ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәйем. Етәкселектең янауына, осраҡлы дәғүәселәрҙең ҡыҫырыҡлауына көлөп кенә ҡарайым. Был тормош буйлап мине күптән инде күҙгә күренмәгән йәшәйеш еле алып бара. Уның еңелсә генә иҫеүен мин арҡам менән тоям. Ул мине аныҡ тормош этабында ҡайһы йүнәлештә барырға йүнәлтә. Йәшәйеш еле ниндәй эшкә тотонмаҫҡа икәнлеген иҫкәртә. Ә ҡайһыларын, ҡайһы берҙә көтөлмәгәнен башларға кәрәклеген белдерә. Тормош юлымда йыш ҡына һорауҙарыма яуап биргән кешеләр осрай.

Йылдар буйы яфалар сигеп туплаған тәжрибәмде мин балаларға бирәм. Үҙемдең миҫалымда уларҙы ерҙә йәшәгәндә мәктәптә алған белемдең, ғөмүмән, кәрәк булмауына инандырам. Минең барлыҡ ниәтем уҡыусыларҙа ныҡышмал һәм ҙур түҙемлек менән ихтыяр көсө, тырышлыҡ, тирә-яҡ мөхиттән һәм өйөрҙән бойондороҡһоҙлоҡ, тормошҡа дөйөм алғанда һәм уның айырым сағылыштарына ижади ҡараш, һәр эште еренә еткереп һәм сифатлы башҡарыу, түҙемлек һәм сыҙамлыҡ кеүек сифаттарҙы үҫтереү ине. Теоремалар, орфография, тарихи ваҡиғалар, климат һәм тәбиғәтте беҙ был процесс алға ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеүгә ярҙам иткәне һәм һанап үтелгән кешелек сифаттарын булдырыуға ярҙам иткәне өсөн генә өйрәндек. Үҙемдең тормош юлымдың этаптарын ентекле анализлап һәм башҡаларҙың өмөттәре селпәрәмә килеүен, уларҙың фажиғәһен күреп, тормошобоҙҙон әлеге мәлдә нисек булғанлығына килтергән йәшерен механизмдарҙы асыҡларға тырыштым. Кешене мыжыҡ, илаҡ һәм бәхетһеҙ иткән күҙгә күренмәҫ ҡушма өлөштәрҙе асыҡланым. Ихтыяр көсө булмау - был тормоштоң барлыҡ бәхетһеҙлектен, фәкирлектең төп бәләһе. Әммә үҙен мәхрүм тип тойғандарҙың береһе лә үҙ-үҙен шундай булғаны өсөн ғәйепләмәйәсәк. Улар атаәсәләрен, тормош иптәштәрен, климат шарттарын, дәүләтте, милләтен - мөмкин булған бар нәмәне ғәйепләйәсәк, әммә үҙҙәрен түгел. Сығанаҡ иһә кешенең үҙендә - тап ул үҙен-үҙе шундай итеп яһаған. Әммә шуны ла таныырға кәрәк, кешенең юҡҡа сығыуына бик йыш ғаилә һәм мәктәп этәргес көс булып тора.

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ, философия фәндәре докторы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

### Өсөнсө көн

**Беренсе бүлек: аҡыл. Аҡылды һәм уңышты күнектереү көсө**

Бөгөн һеҙ аҡылығыҙҙы уңышҡа көйләүҙең барлыҡ файҙаһын һәм һөҙөмтәлелеген аңларһығыҙ. Тормошоғоҙҙоң теләһә ниндәй өлкәһендә камиллыҡтың асҡысы булып хәҡиҡәтте таныу тора: нимәгә иғтибар туплаясаҡһығыҙ һәм нимәгә өлгәшәсәкһегеҙ. Әгәр иғтибарығыҙҙы бары тик яҡшы нәмәләргә генә туплап, уйығыҙҙағы образдарҙы бары тик матур картиналар рәүешендә генә файҙаланһағыҙ, тәбиғәт ҡанундары үҙҙәре үк уларҙы тормошҡа ашырыуҙы үҙ өҫтөнә аласаҡ.

Аңды бер нәмәгә генә туплауҙың иң уңайлы ысулдарының береһе -һорау-яуап. Көнөгөҙҙө уңыштың биш һорауын тәҙөүгә көйләүҙән башлағыҙ.

а) Бөгөнгө көнөмдө нисек итеп тормош хазинаһы итә алам һәм бының өсөн миңә нимә эшләргә кәрәк?

б) Нимә өсөн рәхмәтле булырға? (Аңығыҙҙа ғына тулы исемлек төҙөгөҙ).

в) Аҡылымды, тәнемде һәм рухымды камиллаштырыу өсөн бөгөн нимә эшләй алам?

г) Иң аҙ ҡуламдө булһа ла тирә-яҡ мөхиткә яҡшырыу өсөн ниндәй өлөш индерәм?

д) Көләү һәм шатланыу өсөн нимә эшләй алам?

Был һорауҙар тормошоғоҙҙоң бер өлөшөнә әүерелергә, көн дә иртән йыуынған кеүек үк, был һорауҙарға яуап биреү ғәҙәтегеҙгә инергә тейеш. Был ни бары бер нисә минутығыҙҙы алыр. Улар бик тиҙ көн дауамында барлыҡ ғәмәлдәрегеҙгә лә ыңғай йоғонто яһар һәм көйефегеҙҙе яҡшыртыр. Был ябай күнекмә оҙайлы һөҙөмтә бирер һәм барлыҡ тормошоғоҙҙо байытыр.

**Икенсе бүлек: тән. Кирегә, тәбиғәткә**

Тәбиғәт арыған мейегә һәм тәнгә иҫ киткес йоғонто яһарға һәләтле. Тәбиғәт менән берлектә уҙғарған ваҡыттың барлыҡ матурлығын таныу - ысын тыныслыҡҡа һәм көсөргәнештән арыныуға бер аҙым. Бөгөн үҡ тирә-яҡ мөхит менән бәйләнеш тәьмин иткән ниндәй ҙә булһа сараның планын төҙөгөҙ. Ул тәбиғәттә аҙна буйы йәйәүле поход та, урманда ярты сәғәт йөрөү ҙә булыуы мөмкин. Бында барлыҡ иғтибарҙы тирә-яҡ мөхиткә йүнәлтергә һәм уның ябайлығына, матурлығына тағы бер тапҡыр һоҡланырға кәрәк. Беҙ предметтарҙы һәм күренештәрҙе улар ысынбарлыҡта нисек булғандан күпкә ҡатмарлаштырабыҙ, шуға күрә әле тап һеҙ лайыҡ булған нәмә - ул бер ни тиклем ваҡытығыҙҙы зәңгәр күккә йәки тын ғына аҡҡан һыуға ҡарап уҙғарыу. Тәбиғәт менән бындай бәйләнеште аҙналыҡ графигығыҙҙың бер өлөшө итеп алығыҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 29 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.05 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+).
13.45 "Истина где-то рядом" (16+).
14.00 "Другие новости".
14.25 "Понять. Простить" (12+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Проспект Бразилии". Сериал (16+).
16.10 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+).
17.00 "Женский доктор-2". Сериал (16+).
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами).
18.20 "Трое в Коми". Комедийный сериал, 1-я серия (16+).
18.50 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Серафима Прекрасная". Мелодраматический сериал, 1-я и 2-я серии (16+).
23.30 "Зворыкин-Муромец" (+16).
24.00 "Следствие по телу" (16+).
02.20, 03.05 "Тело Дженнифер" (16+).
03.00 Новости.
04.05 "Элементарно" (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "1000 мелочей".
09.45 "О самом главном".
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+).
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.50 "Вести. Дежурная часть".
12.00 "Тайны следствия". "Роль жертвы". Сериал (12+).
13.00 "Особый случай" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны института благородных девиц", 139-я серия. Сериал.
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда". Сериал, 1-я, 2-я серии (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.40 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "В зоне риска". Детективный сериал, 1-я и 2-я серии (12+).
00.35 "Вести+".
00.55 Закрытие Международного конкурса молодых исполнителей "Новая волна-2013". Трансляция из Юрмалы.
02.50 "Закон и порядок-17" (16+).
03.40 "Комната смеха".
04.45. "Вести. Дежурная часть".

### "ҠУРАЙ"

07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Вәкилә Ҡалмантаева (6+)
10.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Фидан Ғафаров (6+)
10.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Каруанһарайға 20 йәш". Концерт (6+)
21.00 "Минең планетам ". Азат Биксурин (6+)

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00, 11.30 Новости недели (16+).**
**10.30 "Семәр".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+).**
**11.15, 17.15 "Орнамент".**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык".**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Уңған килен" (16+).**
**13.30, 00.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45 "Мелодии души" (12+).**
**14.45 "Автограф" (6+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Бауырһаҡ".**
**16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз).**
**16.45 "Дорога к храму".**
**17.55 Предсезонный турнир среди молодежных команд на Кубок ХК. В перерыве - Новости (на башк. яз.) (6+).**
**20.30 "Телецентр".**
